✔ *Аллаһы Тәғәлә һөйгән*
*Ике сифат биҙәр холоҡто:*
*Береһе уның - йомшаҡлыҡтыр,*
*Икенсеһе - сабырлыҡтыр.*
*Рауил Бикбаев. "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис".*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23

22 - 28 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№8 (582)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Атай ҡәберенә...**



оҙайлы юл

6

**Ҡалҡан булырҙаймы ир-егеттәр...**



8-9 иле, ере-һыуы, яҡындары өсөн?

**Сиркәү көмбәҙендәге...**



11 башҡорт уғы

**Спорт менән шөғөлләнәйек,**

йәки Тренер һабаҡтары...



12-13

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ЮНЕСКО тарафынан туған телдәрҙе һаҡлау халыҡ-ара кимәлдәге мөһим мәсьәлә тип ҡуйылғанда, республикабыҙҙа башҡорт телен өйрәнеү һәм уҡытыуға ҡарата мөнәсәбәт хаҡында ниҙәр әйтергә була?

***Гөлсәсәк ҒӘЗИЗУЛЛИНА, Өфөнөң М.Искужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, БР мәғариф отличнигы:*** Беҙҙең лицейҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте предмет булараҡ уҡытыла. 1-6 кластарҙа - аҙнаһына 5 сәғәт, 7-9 кластарҙа - 4, ә 10-11-ҙә аҙнаһына 2 тапҡыр. Беҙгә балаларын уҡырға биреүсе ата-әсәләр ҙә, балалар үҙҙәре лә мәктәбебеҙҙең башҡорт лицейы икәнлеген, уҡыу программаһы буйынса башҡорт теленең төп предметтарҙың береһе булыуын белеп килә, шуға ла туған тел уҡытыуға ҡағылышлы аңлашылмаусылыҡ, ығы-зығы, проблемалар юҡ, тип әйтергә була. Ә бит был үҙе генә лә бик күпте аңлата: тимәк, йөҙөп йөрөп эшләргә форсат бар, тигән һүҙ! Ләкин ҡала балаларына туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыуҙың үҙенә күрә генә объектив ҡыйынлыҡтары ла бар, әлбиттә. Был осраҡта туған телгә мөнәсәбәт, уны уҡытыу торошо күп йәһәттән уҡытыусыға, унын тәжрибәһе, һөнәри оҫталығына бәйле, тип ҡаралһа ла, уҡыусыларҙың әҙерлек кимәлен дә иҫәпкә алмайынса булмай, сөнки улар ғаиләләре мөхитенән, балалар баҡсаһынан төрлө әҙерлек менән килә: берәүҙәр (үкенескә, ундайҙар һирәк) әсә телендә матур һөйләшә, уҡый һәм яҙа белә, икенселәр уртаса кимәлдә булһа, күпселек башҡортса бер ауыҙ һүҙ ҙә белмәй, тик русса һөйләшә. Бына ошо һуңғылары менән телде хатта әлифбанан башлап өйрәнергә тура килә. Бер класта, шулай итеп, берҙәм программа буйынса һәм бер генә дәреслектән уҡытыу мөмкин булмаған эш. Юғары кластарға килгәндәр менән дә ҡайһы саҡ телде әлифбанан башлап өйрәнәбеҙ. Ә шулай ҙа бында иң мөһиме - балаларҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу. Бының өсөн дәрестәрҙе мөмкин тиклем төрлө алымдар, заманса уҡытыу саралары менән байытырға, бер төрлөлөктән, бигерәк тә уларҙы ялҡытыуҙан ҡасырға тырышыла. Дәресте уйын рәүешендә ҡороу, интернеттан башҡортса Википедияны, төрлө клиптар, видеояҙмалар ҡарау, хатта кесә телефондарын файҙаланыу - саралар күп хәҙер. Ҡағыҙәләр ятлатып, дәреслектәргә йәбешеп уҡытыуҙан ғына белем биреп булмай. Әйткәндәй, заманса яңы дәреслектәр тураһында күпме һөйләйбеҙ инде! Дәреслектәр бөгөнгө балалар аңына һәм психологияһына ярашлы, йәнле һәм ҡыҙыҡлы итеп төҙөлһөн ине, күнегеү текстары ла ялҡытырлыҡ, үтә ҡатмарлы булмаһын. Ғәҙәттә, ошо турала һүҙ ҡуҙғатһаң, үҙегеҙ яҙығыҙ улайһа, тигән яуап ишетәһең. Алдынғы, тәжрибәле тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының уҡытыу методикаһы нигеҙендә, эйе, бынамын тигән дәреслектәр сығарырға булыр ине ул, тик бының өсөн бит күпмелер ваҡытҡа ижади отпуск кәрәк булыр ине уҡытыусыларға. Бына шулай, ҡала мәктәптәрендә балаға әсә телен өйрәтеү өсөн уҡытыусыға, ысынлап та, үҙ иңенә бер нисә йөк алырға тура килә икән шул: туранан-тура үҙенең төп бурысын үтәү менән бергә, ул балаһын үҙ телендә һөйләшергә лә өйрәтә алмаған ата-әсә ролен дә, ҡала мәктәптәре өсөн дәреслек, методик ҡулланмалар әҙерләп сығарырға тейешле ғалим-авторҙар эшен дә башҡарырға бурыслы булып сыға. Әгәр уҡытыусы үҙ тәғәйенләнешен аңлаған шәхес икән, бындай бурыстар уны ҡурҡытмай, сөнки маҡсат юғары: илһөйәр рухлы ысын шәхестәр тәрбиәләү фәҡәт әсә теле һәм туған әҙәбиәт уҡытыусылары иңендә ята.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### АЛЫҪТАН КИЛГӘН ХӘБӘР

# УҠ-ҺАҘАҠҠАЙ АША...

## йылдар ауазы килә

**Күптән түгел миңә, "1813" йәмғиәте ағзаһы булараҡ, унын делегацияһы составында Германияның көнсығыш өлөшөндәге Ирекле Тюрингия биҫтәһе баш ҡалаһы -Эрфуртта булырға тура килгәйне. Беҙҙең төркөм ҡаланың бик күп тарихи урындарында, шул иҫәптән Эрфурттың билдәле "Петерсберг" цитаделендә булды.**

1147 йылда монастырь булараҡ нигеҙ һалынып, аҙаҡ 1631 йылда ҡәлғә-нығытма итеп төҙөлгән был цитадель ифрат бай тарихҡа эйә. Заманында бында швед гарнизондары, Наполеон ғәскәре, пруссактар, рустар торған. Икенсе донъя һуғышы йылдарында бында вермахт подразделениелары, аҙаҡ Германия Демократик Республикаһы армияһының хәрби частары урынлашҡан була. Әле бында - музей.

"Петерсберг" менән бәйле ҡыҙыҡлы хәрби эпизодтарҙың береһе Наполеон ғәскәренең Лейпциг янында союздаш армиялар тарафынан емергес тар-мар ителеүгә дусар булып, сигенгән мәленә тап килә. Әйткәндәй, бындағы һуғышта рус кавалерияһы составында 5 башҡорт полкы ҡатнаша. Франция яғына сигенеүсе Наполеондың юлында Эрфурт ҡалаһы ята һәм тар-мар ителгән армия ҡалдыҡтары ял итеү һәм ҡайтанан тупланыу өсөн ошонда туҡтала. 1813 йылдың октябрь аҙаҡтарына уҡ французда-рҙы эҙәрлекләүсе Александр 1 ғәскәрҙәре, шулай уҡ австралийҙар һәм пруссактар Эрфуртҡа яҡынлай һәм Наполеондың яҡшы ҡоралланған, һуғыштарҙа сынығыу алған 7 меңләп һуғышсыһы тарафынан һаҡланған гарнизонды яулап алырға әҙерләнә башлай. Дөрөҫ, император үҙе был ҡалала булмай сыға - ул яңынан ғәскәр туплап, реванш алыу маҡсатында Францияға ҡайтып китә. Был ваҡытта бай арсенал һәм етерлек аҙыҡ-түлек тупланған бик яҡшы ер аҫты селтәренә эйә булған һигеҙ бастионлы цитаделдә үҙ анттарына тоғро һалдаттар аҙаҡҡаса торорға әҙерләнә.



**(Дауамы 7-се биттә).**

ӘЙҘӘГЕҘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# "ТИМЕР АТТА"... реклама хеҙмәте



**Бөгөн һәр икенсе кешенең милкендә еңел автомобиль генә түгел, ә бәләкәй йәки ҙур йөк машинаһы ла бар. Берәүҙәр машиналарын тик үҙ ихтыяждары өсөн генә ҡулланһа, икенселәр "тимер ат"тарын тура мәғәнәлә эшкә "егә". Мәҫәлән, еңел автомобилдә такси хеҙмәттәре күрһәтә, уны ҡуртымға бирә һәм башҡалар, ә йөк машинаһында әйбер ташый, ауылда йәшәүселәр күрше-тирәһенә бесән килтерә, ҡала ерендә иһә күсенеүҙә ярҙам итә.**

Минең дә "Газель" йөк машинам бар. Юғарыла һаналған хеҙмәттәрҙе күрһәтеү менән бер рәттән "тимер ат"ым ярҙамында аҡса эшләүҙең тағы бер юлын ҡулланам. Машинаның арттағы киндер япмаһы (тент) 3 метрҙы тәшкил итә һәм мин унда төрлө фирма, ойошма йәки шәхси эшҡыуарҙарҙың теге йәки был хеҙмәте тураһындағы рекламаһын йәбештерәм. Реклама ваҡыты төрлөсә - кемдер минең хеҙмәт менән бер-ике аҙна, ә икенселәр ай, ярты йыл, хатта бер йыл дауамында ла файҙалана. Машина менән ҡалала ғына түгел, ә республиканың төрлө район-ауылдарында ла йыш булам, шуға күрә бындай реклама үҙ файҙаһын бирә. Шулай итеп рекламаһын минең машинала урынлаштырыусы ла, мин дә отам. Реклама хеҙмәттәре өсөн хаҡты күп һорамайым, сөнки күпте теләп әҙҙән ҡалғы килмәй. Реклама биреүсенең ойошмаһы ҙурлығына, күпме ваҡытҡа реклама биреүенә ҡарап эш итәм. Яңы эш башлап торғандарға, йәштәргә ташлама яһайым. Шулай уҡ принципаль рәүештә, ниндәй хаҡ тәҡдим итеүҙәренә ҡарамай, спиртлы эсемлектәр һәм тәмәке етештергән, һатҡан эшҡыуарҙар менән хеҙмәттәшлек итмәйем. Ҡайһы саҡта хаҡты тауарлата ла алам. Мәҫәлән, ошо рәүешле күмәртәләп аҙыҡ-түлек, ит ашамлыҡтары алғаным бар, шулай уҡ баҡсала ҡулланыу өсөн тәғәйенләнгән эш ҡоралдарына һәм башҡа әйберҙәргә эйә булдым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әҙме-күпме аҡса эшләү мөмкинлеге биргән әлеге ысулдың бер ниндәй ауырлығы ла юҡ. Ни бары ошондай хеҙмәт күрһәтеү тураһында гәзиткә йәки Интернет селтәренә реклама биреү ҙә етә. Артабан иһә "сарафан радио"һы үҙ эшен башҡарасаҡ.**

**КӘРИМ БИҠҠОЛОВ,**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# ЮНЕСКО тарафынан туған телдәрҙе һаҡлау халыҡ-ара кимәлдәге мөһим мәсьәлә тип ҡуйылғанда, республикабыҙҙа башҡорт телен өйрәнеү һәм уҡытыуға ҡарата мөнәсәбәт хаҡында ниҙәр әйтергә була?




(Башы 1-се биттә).

***Луиза СӘМСИТОВА, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты деканы, профессор:*** Туған телебеҙҙе һаҡлау, уны өйрәнеү һәм уҡытыу мәсьәләләре закон тарафынан яҡлаулы. Ниндәй генә аңлашылмаусанлыҡ йәки ҡаршылыҡтар килеп тыумаһын, беҙ законға нигеҙләнеп, әсә телебеҙҙе яҡларға ла, һаҡларға ла бурыслыбыҙ. Үҙ телебеҙҙә һөйләшергә, ошо телдә ижад итергә, уның менән ғорурланырға беҙ тулыһынса хоҡуҡлы, быны беҙгә бер кем дә тыя алмай. Шулай булғас, күп нәмә беҙҙең үҙебеҙҙән тора. Баланың теле ғаиләлә асыла, шуға күрә тел, рух төшөнсәһе уның аңына ата-әсә тарафынан һалынырға тейеш, тип уйлайым.

Телде өйрәнеүҙә икенсе мөһим фактор - ул мәктәп һәм башҡа төрлө уҡыу йорттары. Бында инде бөтөн "һауа торошон" уҡытыусы яһай, бөтә мәсьәләне уның абруйы хәл итә. Әгәр башҡорт теле уҡытыусыһы үҙенең кешелек һәм рухи-мәҙәни сифаттары, һөнәри оҫталығы йәһәтенән шундай кимәлгә күтәрелә алған икән, уның менән бөтәһе лә: мәктәп директоры ла, уҡыусы балалар ҙа, ата-әсәләр ҙә иҫәпләшәсәк һәм тел уҡытыу-уҡытмау проблема булып тормаясаҡ. Ә бит бының менән уҡытыусы үҙенең генә түгел, тотош милләтебеҙ абруйын яҡлай, уның бәҫен күтәрә, халҡыбыҙҙың йөҙөн билдәләүсе булып та сығыш яһай. Бөгөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыу еңел генә итеп дәрес биреп ҡайтыу түгел. Был фронтта халҡыбыҙ мәнфәғәте өсөн көнө-төнө янған кешеләр генә эшләргә тейеш. Студенттарыбыҙҙы - киләсәк уҡытыусыларын - беҙ шулай тип өйрәтәбеҙ ҙә инде. Университетыбыҙ башҡорт халҡының бөйөк мәғрифәтсеһе Аҡмулла исемен йөрөтә, ә башҡорт филологияһы факультеты бөгөн дә ошо уҡыу йортоноң брендын булдырып тороусы факультеттарҙың береһе. Университеттың Ғилми советы тарафынан раҫланыуынса, беҙҙәге бөтөн факультеттарҙа ла башҡорт теле уҡытыла, төрлө специальность аласаҡ студенттар ҙа башҡорт телен өйрәнә, башҡа предметтар рәтендә уның буйынса ла имтихан һәм зачеттар тапшырыла. Башҡортостандың бөтә уҡыу йорттарында ла эш тап шулай ҡуйылырға тейеш, тигән фекерҙәмен.

***Исмәғил ТИМЕРБУЛАТОВ, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** 21 февралдә Халыҡ-ара туған тел көнөн билдәләүҙе бик мөһим һәм кәрәкле сара тип иҫәпләйем. Ундай көн булмаҫ та ине, бәлки, әгәр ҙә 1952 йылдың 21 февралендә алыҫтағы Бангладеш иле студенттарының үҙ әсә телдәре - бенгали телен дәүләт теле итеп таныуҙы талап иткән демонстрацияның алғы сафында килеп, полицейскийҙар пуляһынан йәш ғүмеркәйҙәре өҙөлөп ҡалмаған булһа... Шул патриоттар иҫтәлеген мәңгеләштереп, 1999 йылдан алып ЮНЕСКО Халыҡ-ара туған тел көнөн билдәләй ҙә инде. Был дата телдәр һәм мәҙәниәттәр төрлөлөгөн, күп теллелеккә ынтылышты кәүҙәләндерә, донъя мәҙәниәте үҫешен тәьмин итеүсе булараҡ, туған телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү маҡсаттарын, аңлашып, бер-береңә түҙемлек һәм диалог нигеҙендә аралашып йәшәү принциптарын күҙаллай. Тап бына ошо принциптар һанға һуғылмағанға күрә лә инде Европала бөгөн 50-гә яҡын тел дәүләт телдәре тарафынан ҡыҫырыҡлана. Ә бына Рәсәйҙә 136 тел юғалыу ҡурҡынысы аҫтында. Ә бит тел юғалыу - ул тотош халыҡтың юғалыуы тигән һүҙ. Ошондай шарттарҙа туған тел ҡәҙере айырыуса нығыраҡ беленә башлай төҫлө, сөнки йыш ҡына күпселеккә тел яҙмышына төптәнерәк ҡараш ташлау етмәй. Быға үҙемдең ғаилә миҫалынан сығып ҡарау ғына ла етә. Улым матур итеп башҡортса һөйләшә, хатаһыҙ итеп уҡый һәм яҙа. Туған тел һәм әҙәбиәттән гел "бишле"гә генә уҡыны. Шулай ҙа иптәштәре менән (улары ла башҡорт булыуға ҡарамаҫтан) рус телендә аралашалар. Телде һәйбәт белһәм дә, ул миңә артабан белем алғанда кәрәкмәй, тигән ҡараш формалашты уның аңында. Ә бына сит илгә уҡырға киткәйне, киреһенсә, башҡорт теле менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы. Контакт, скайп аша миңә туҡтауһыҙ һорауҙар яуҙыра, кәңәшләшә. Баҡтиһәң, ул үҙе кеүек үк сит илдәрҙән - Иран, Монголия, Һиндостан, Төркиә, Урта Азия һәм Африка илдәренән килгән студенттар менән дуҫлашҡан һәм улар дәрестәрҙә бер-береһенең тел үҙенсәлектәрен, оҡшаш сифаттарын сағыштырып өйрәнәләр булып сыҡты. Башҡорт телен яңы дуҫтары "ғәжәп яңғырашлы, йыр кеүек ягымлы тел" тип атайҙар һәм уны өйрәнергә теләк белдерәләр. Бына бит нисек, үҙ илеңдә "кәрәкмәй" тип иҫәпләнгән тел ситтә, киреһенсә, башҡа телдәрҙе өйрәнеүгә тура юл аса. Күпме тел белһәң, шунса бай булырһың, тигәнде аңлаған хәҙер улыбыҙ, шуға ҡыуанып бөтә алмайым. Ошо факттан сығып, мәктәптә уҡытҡанда балаларҙы киләсәктә туған телдең кәрәклегенә, уның башҡа халыҡтар менән аралашыу аҡсысы булыуына нығыраҡ баҫым яһап, күберәк ошо тулҡынға көйләү кәрәктер, тип уйлайым, сөнки хәҙер беҙ элекке кеүек үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнамайбыҙ, ә сит илдәр менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә йәшәйбеҙ бит.

***Вилорий ЯҠУПОВ, БР Иҡтисадты үҫтереү министрлығы хеҙмәткәре:*** Туған телебеҙҙе өйрәнеүҙең кәрәклеге тураһында һөйләп тороу артыҡтыр, сөнки үҙен заманыбыҙҙың мәҙәниәтле, зыялы бер вәкиле тип иҫәпләгән һәр кем уны йөрәге ҡушыуы буйынса өйрәнергә, күҙ ҡараһылай ҡәҙерләп һаҡларға бурыслы. Тел - аралашыу сараһы ғына түгел, ул беҙҙең кем, ниндәй халыҡ икәнлегебеҙҙе лә күрһәтеп тороусы. Нисәмә быуаттар буйына ата-бабаларыбыҙ уны изге аманат күреп һаҡлап, беҙгә килтереп еткергән икән, бөгөнгө быуын ошо сылбырҙың телен белмәгән, танымаған боҙоҡ бер өлөшө булып сыға алмай бит инде! Минең уйымса, тел яҙмышы күбеһенсә ғаиләлә хәл ителә. Ата-әсә сабыйының теле асылмаҫ борон уҡ уның менән туған телендә һөйләшә башларға тейеш. Ҡайһы бер ата-әсәләр, туған телен өйрәнеү балаға, ул үҫкәс, русса таҙа итеп, акцентһыҙ һөйләшергә ҡамасаулар һәм карьераһына юл ябыр, тип уйлап, бик хаталана. Киреһенсә, бөгөнгө шарттарҙа ике тел, күп телдәр белеү хуплана ғына. Берҙән, был аралашыу сиктәрен емереп, яңынан-яңы бәйләнештәргә юл аса, ғалимдар иҫбатлауынса, күп тел белеү кешенең мейе эшмәкәрлеген дә әүҙемләштерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Череповецта (Вологда өлкәһе) Рәсәй Президенты Владимир Путин уҙғарған ғаилә, әсәлек һәм балалыҡ өлкәһендә дәүләт сәйәсәте мәсьәләләре буйынса Дәүләт советы президиумы ултырышында ҡатнашты. Ултырыш барышында Рәсәй Федерацияһы Президентының майҙағы указдарындағы тейешле положениеларҙың үтәлеше тикшерелде. Мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында урындар етмәү мәсьәләһе лә тикшерелде. Владимир Владимирович әлеге ваҡытта Рәсәй Хөкүмәтенең ғаилә сәйәсәте концепцияһы өҫтөндә эшләүе тураһында белдерҙе.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2015 йылда күренекле дәүләт эшмәкәре - Зыя Нурыевтың тыуыуына 100 йыллыҡты байрам итеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында ҡатнашты. Унда билдәләнеүенсә, республикала бишенсе йыл рәттән халыҡтың тәбиғи үҫеше һаҡланып килә. Тыуым үткән йылдар күрһәткестәренә ҡарағанда тотороҡло арта. 2013 йылда 60 меңләп бала тыуған. Балалар үлеме иҫәбе лә уртаса Рәсәй кимәленнән түбәнерәк. Әммә халыҡтың дөйөм үлеме юғары булып ҡала - йылына 54 мең кеше. "90-сы йылдарҙа республика йәшәү оҙайлығы буйынса лидер ине, хәҙер беҙ Рәсәйҙә 7-8 урындарҙа. Шуға ҡарамаҫтан, дөйөм йәшәү оҙайлығының күрһәткесе бер йылға үҫкән", - тине Рөстәм Хәмитов.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Балаларҙың, үҫмерҙәрҙең, йәштәрҙең ялын һәм мәшғүллеген тәьмин итеү, һаулығын нығытыу буйынса ведомство-ара республика комиссияһы ултырышы уҙҙы. Кәңәшмәне БР Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова үткәрҙе. Кәңәшмәлә балалар ялы өлкәһендә яңы нормативтар индереү тикшерелде. Республиканың мәғариф министры Әлфис Ғаязов хәбәр итеүенсә, профилле лагерҙарға ихтыяж ҙур. 2015 йылдан алып ауыр тормош шарттарында ҡалған балаларҙың ялын федераль бюджеттан финанслау туҡтатыласаҡ, әммә был йөктө республика бюджеты үҙ өҫтөнә аласаҡ.

✓ *"Ғаризаңды юристар үткәрмәне, сөнки "КФХ" (коллективное фермерское хозяйство) тигән ойошма Гражданлыҡ кодексында юҡ", - тинеләр. Тимәк, һалым түләгәндә бындай ойошма бар, кредит алыу өсөн юҡ булып сыға.*

*ШАҢДАУ*

# КЕШЕ ДОНЪЯҒА ТЫУҒАН ИКӘН - ЙӘШӘРГӘ,

## ә йәшәр өсөн эшләргә тейеш

**"Киске Өфө"нөң 4-се һанында Илдар Ғәбитовтың "Ирҙәр буйҙаҡлығына баҙар иҡтисады ла, ҡатын-ҡыҙ ҙа ғәйепле" тигән мәҡәләһен уҡығас, уға эйәреп, үҙемдең фекерҙәремде лә белдерергә булдым. Автор ҡуҙғатҡан проблема илдә килеп тыуған кире күренештәргә борсолған, халҡыбыҙҙың киләсәген ҡайғыртҡан һәр ҡайһыбыҙҙың, бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүсе кешеләрҙең йөрәк яраһы ул.**

Иң тәүҙә бөгөн килеп тыуған хәлдә ҡатын-ҡыҙҙан элек, ил ағаһы тигән исем йөрөткән үҙебеҙҙе - ир-егеттәрҙе ғәйепләр инем. Баҙар иҡтисады иң тәүҙә дөйөм хужалыҡтарҙы юҡҡа сығарып, ир-уҙамандарҙы эшһеҙ ҡалдырҙы. Һөҙөмтәлә ирҙәрҙең ҡылыҡ-холоғо ла, тормошҡа ҡарашы ла үҙгәрҙе. Кешелә һуңғы 30 йыл эсендә барлыҡҡа килгән кире сифаттар барыһы ла дәүләт алып барған эске сәйәсәт һөҙөмтәһәлер, тип уйлайым. Илдә колхоз-совхоздарҙы бөтөрөп, фермер хужалыҡтарын тергеҙергә ирек бирелһә лә, барыбер аҙыҡ-түлек етештерергә форсат тыуҙырылманы бит. Мәҫәлән, мин 1992 йылдан алып 2002 йылға тиклем фермер булып эшләнем. Ун йыл эсендә банктарҙың, төрлө кимәлдәге түрәләрҙең асмаған ишеген ҡалдырманым, исмаһам, 10 мең һум да кредит ала алманым. Ни өсөн ул кредитты бирмәгәндәрен дә аңлай алманым. Иң аҙаҡҡы тапҡыр: "Ғаризаңды юристар үткәрмәне, сөнки "КФХ" (коллективное фермерское хозяйство) тигән ойошма Гражданлыҡ кодексында юҡ", - тинеләр. Тимәк, һалым түләгәндә бындай ойошма бар, кредит алыу өсөн юҡ булып сыға.

Бөгөн дә нәҡ шуның һымаҡ: ил баҙарында һөттөң литры 11 һум тора икән, һин дә шул хаҡҡа етештер, тип әйтәләр. Бер литр һөт барлыҡҡа килһен өсөн һыйырҙың йөрәге аша 100 литр ҡан үтергә тейеш, ә ул ҡан һауа менән һыуҙан ғына барлыҡҡа килмәй. Беҙҙең тәбиғәт шарттарында һыйыр йылдың 8 айын ҡурала тора. Йыл һайын яғыулыҡҡа һәм техника кәрәк-яраҡтарына хаҡтар артып тороуын иҫәпкә алһаҡ, үҙең сәсеп үҫтергән аҙыҡты ашатып, ашлыҡ үҫтереү өсөн ниндәй генә механизация ысулдарын ҡулланһаң да, хатта һыйырың һөттө күп бирә торған тоҡомло булған осраҡта ла, ул хаҡҡа һөт етештереп булмауы көн кеүек асыҡ.

Дөйөм иҡтисадта: "Ауыл хужалығы иҡтисадын экспортҡа сығарып булмай", - тигән ҡәтғи ҡағиҙә йәшәй. Сөнки ул һәр бер хужалыҡтың урынлашҡан урыны, тәбиғәт шарттары, ерҙәрҙең уңдырышлылығы, көтөүлек, тәбиғи сабынлыҡтар кеүек уңайлыҡтарға бәйле. Бер генә ауылдың эсендә лә ошо уңайлыҡтар төрлөсә булыуы ихтимал. Тап ошо уңайлыҡтарға ҡарап, берәү ваҡ малын - 150-200 башҡа, икенсеһе - эре малын 10-15-кә еткерһә, уларҙы яр һалып маҡтайбыҙ һәм ҡалғандарын ялҡаулыҡта ғәйепләй башлайбыҙ. Бәләкәй генә бер миҫал: совет осоронда беҙҙең ауылда 98-100 йорт хужалығы иҫәпләнде, 430-450 кеше йәшәне. Йәйге осорҙа 270-280 баш эре мал көтөүлеккә тупланыр ине, ә ваҡ мал һаны 1200-1300-гә етә ине. Ауыл тирәһен иген баҫыуҙары уратып алған, етмәһә, бригада йыл әйләнәһенә уртаса 15-16 мең баш һарыҡ көтөлдө, сабынлыҡтар етешмәне. Әммә кеше ялҡауланып ятманы, 15-20 саҡрымдағы Ҡырҡты тауҙары аша артылып, бесән эшләне. Хөкүмәт шәхси хужалыҡта артыҡ мал тоторға рөхсәт итмәһә лә, кеше әмәлен тапты, малын көттө, колхозда ла эшләне, ваҡытын табып, кәсеп тә итте. Колхоздың тракторы көндөҙ колхоз эшендә булһа, төндә кешегә эшләр ине. Сөнки итен дә, һөтөн дә, йөнөн дә, картуфын да әҙерләү контоналары (заготконтора) юғары хаҡҡа ҡабул итте, баҙарҙа ситтән килтергән ит, һөт булманы. Ул осорҙа Башҡортостан итте Силәбегә ҡарағанда 20 тингә ҡиммәтерәккә ҡабул итә ине, шуға ла Силәбенең беҙгә сиктәш райондары итен бында ташыр ине.

Әбөгөн ауылда йорттар һаны 150-нән ашып китте, ә кешеләре элеккегә ҡарағанда күпкә әҙ. Һәр йортта 1-2 пенсионер, буйҙаҡ ирҙәр. Буш торған өйҙәр бар, ҡайһыларының хужалары ҡалала йәшәп, ялға ҡайтып йөрөй. Мал һаны йыл һайын кәмей килә. Былтыр 140 баш эре мал көтөүгә сыҡты, быйыл унан да әҙ булыуы ихтимал. Ваҡ мал 300 баштан ашмай. Ә ауыл тирәләй бар баҫыуҙар буш ята, уларҙы ағас баҫып бара, сабынлыҡтар ҙа етерлек, тик берәү ҙә мал һанын ишәйтергә ынтылып тормай. Бер һүҙ менән ҡотолалар - мал үрсетеүҙән файҙа юҡ, бушҡа ыҙалау ғына. Сөнки магазин кәштәләре сит илдән килгән "ит" тәме сыҡҡан колбасалар, "һөт" тәме килгән эсемлектәр һәм башҡа осһоҙ аҙыҡ-түлек менән тулы. Ошо ризыҡтар менән туҡланып, Уралдың ҡаты тәбиғәтендә йәшәгән ирҙәребеҙҙең көс-ҡеүәте, дәрте түгел, яғаһы ғына күтәрелә.

Сәләмәтлегебеҙ ошо ризыҡтарға, психологиябыҙ ошо йәшәйешкә бәйле. Хәҙер йөрәк-ҡан тамырҙары, яман шеш кеүек ауырыуҙарҙан пенсия йәшенә етмәй үлгән ирҙәребеҙ бихисап. Былтыр бер гәзиттә республиканың өс ҡалаһында 9 ай эсендә теге донъяға күскән 9 мең кешенең 48 проценты ҡан баҫымы ауырыуынан үлгән тигән мәғлүмәт баҫылғайны. Ике йыл элек әрмегә саҡырылған егеттәрҙең 34 проценты хеҙмәткә яраҡһыҙ булһа, бөгөн егеттәребеҙ араһында һалдатҡа барыуҙан баш тартҡандары ла ишәйеп бара.

Һуңғы ваҡытта патриотизм тәрбиәләү йәһәтенән закондар ҙа ҡабул итеп ҡарайҙар, тик патриотик рухты закон менән тәрбиәләп буламы? Элек ауылда ҡул көсө етешмәне, йәйге тығыҙ осорҙа уҡыусы балалар колхоз-совхоз эшенә йәлеп ителеүен барығыҙ ҙа хәтерләйҙер. Улар үҙҙәрендә яуаплылыҡ тойоп, ысын мәғәнәһендә патриотик тәрбиә алды. Шул уҡ ваҡытта, яңы уҡыу йылына үҙҙәре кейенерлек аҡса ла эшләр ине. Хөкүмәт балалар кейеменә бик түбән хаҡ ҡуя ине, бөгөн өс йәшлек ҡыҙ баланың күлдәге 56-сы размерлы ҡатындар кофтаһынан ҡиммәтерәк. Шунан ул балаларҙан беҙ ниндәй әхлаҡи изгелек өмөт итәбеҙ? Хәҙер илле йәштән үткән ирҙәрҙе ҡарауылсы итеп тә эшкә алмайҙар. Фермерҙар ҙа күбәймәй, әҙәйеп бара. Бөгөн уларҙы кооперативҡа берләшеп, элекке колхоздар һымаҡ эшләргә өндәйҙәр. Нисек кенә булмаһын, кеше үҙенең хеҙмәт емешен күрмәһә, бер тәҡдимгә лә йәбешеп ятмаҫ, ауылдарыбыҙ ҙа күтәрелеп китмәҫ.

Бәлки, ҡулланыусылар союзын, әҙерләүҙәр конторaларын тергеҙеп, улары шәхси хужалыҡтарҙан үҫтергән малға түккән сығымын, көсөн ҡайтарып ала алғандай хаҡ менән ит, һөт һәм башҡа нәмәләр ҡабул итһә, кеше әмәлен табып эшләр ине. Ауыл халҡы ҡара таңдан ҡара кискә тиклем алһыҙ-ялһыҙ эшләп өйрәнгән. Ошо сифаттарҙы әле үткән быуат кешеләре иҫән саҡта йәш быуынға өйрәтеп, күрһәтеп ҡалғаныбыҙ яҡшы булыр ине. Былар барыһы ла хөкүмәт кимәлендә хәл ителә торған мәсьәләләр. Кеше донъяға тыуған икән - йәшәргә, ә йәшәр өсөн эшләргә тейеш. Шуның өсөн илдә Хеҙмәт законы ла булырға тейеш. Баҙар иҡтисады хөкөм һөрәме, башҡа берәй төрлө мөнәсәбәттәрме, хөкүмәт иң беренсе нәүбәттә үҙ халҡының яҙмышын хәстәрләргә тейеш. Был хәстәр, мин халыҡ вәкиле, тип мандат йөрөткән депутаттарҙың тәүге бурысы булырға тейеш, тип уйлайым.

Ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, бөгөн уларҙың ярым-яланғас йөрөүе, тәмәке тартыуы, майҙанға сығып һуғышыуы, штанга күтәреүе, хоккей, футбол кеүек спорт төрҙәрендә көс һынашыуы был затҡа һис кенә лә гүзәллек өҫтәмәй. Һәр бер яралтылмыштың тәғәйен урыны-шөғөлө бар. Инглиз телендәге Ҡөрьәнде рус теленә тәржемә итеүе менән билдәле мосолман йәмәғәт эшмәкәре Валерия (Иман) Порохова быға үҙенең аңлатмаһын бирә: "Ир холоҡло ҡатындар ҙа, ҡатын холоҡло ирҙәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең ярлыҡауын тапмаған".



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар тәрбиәне китаптан уҡып түгел, беҙгә ҡарап ала. Демократия лозунгыһы менән килеп ингән бөтөн әҙәпһеҙлектәр сикләнмәһә, Хоҙай үҙе хөкөм сығарыр. Тарихҡа байҡау яһаһаҡ, 19-сы быуат аҙаҡтары - 20-се быуат баштарындағы йәмғиәттәге социаль тигеҙһеҙлек, указлы муллаларҙың үҙҙәре уйлап сығарған дини закондары халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуға сәбәпсе була. Бер нисә йылға һуҙылған һуғыш һөҙөмтәһендә дин бөтөнләй юҡҡа сыға, Башҡортостан буйынса бер генә мәсет тә ҡалмай, емерелеп йә клубҡа әйләндерелеп бөтә. Аллаһы Тәғәлә үҙенең хөкөмөн дә тиҙ сығара - 1921-1922 йылдарҙағы йотлоҡ һөҙөмтәһендә күпме кеше ҡырыла. 1920 йылғы халыҡты иҫәпкә алыу буйынса документтарҙа беҙҙең Салауат ауылында 167 хужалыҡта 650 кешене теркәй. 1925 йылғы иҫәп алыуҙа 67 хужалыҡ, 260 кеше ҡала. Иң үкенеслеһе, бындай йотлоҡтар ҡарт-ҡороно, баласағаны һәләк итә. Ғайса бәйғәмбәрҙең: "Атайҙарығыҙҙың гонаһтары юйылмаҫ, әсәйҙәрегеҙҙеке тигеҙләнмәҫ; балаларығыҙҙың мейеләренә быраулалып кереп, йәндәренә һыу булып һеңер, һөйәктәренә елек майы булып инер", - тигән һүҙҙәрен иҫебеҙгә төшөрәйек тә, илебеҙ, халҡыбыҙ яҙмышын үҙ ҡулыбыҙға алайыҡ, ил ағалары. Фажиғәле тарихтар ҡабатланмаһын ине.**

**Рафиҡ ШӘЙӘХМӘТОВ.**
**Әбйәлил районы Салауат ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфө халҡының иҫәбе 1 миллион 100 мең кешенән артты. Был хаҡта Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡаланың социаль-иҡтисади үҫеш йомғаҡтары буйынса матбуғат конференцияһында хәбәр итте. 2013 йылда ҡалала 17,2 меңдән ашыу бала тыуған. Ул 2012 йыл күрһәткестәренән биш процентҡа күберәк. Тәбиғи үҫеш 4788 кешегә етте. 2013 йыл эсендә Өфө тыуым һәм халыҡтың тәбиғи үҫеше буйынса Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында (1000 кешегә иҫәпләгәндә) иң юғары күрһәткескә эйә булды. "Өфө Рәсәйҙә ул алты йыл рәттән халыҡ иҫәбенең үҫеш динамикаһы билдәләнгән берҙән-бер миллионлы ҡала", - тип билдәләне Ирек Ялалов.

✓ Республика Хөкүмәте төбәктең экологик именлек кимәлен күтәреү һәм тәбиғәт системаларын һаҡлап ҡалыу маҡсатында "Башҡортостан Республикаһы экологияһы һәм тәбиғәт ресурстары" дәүләт программаһын раҫланы. Программаның дәүләт заказсыһы - БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы. Бөтә финанс сығанаҡтары, шул иҫәптән федераль, төбәк, урындағы бюджеттар һәм бюджеттан тыш сығанаҡтар иҫәбенә программаны тормошҡа ашырыуға дөйөм ассигнованиелар күләме 37152,74 миллион һум тәшкил итә.

✓ Һаҡлыҡ банкының ипотека кредиттары ярҙамында 2007 йылдан алып 2013-кә тиклем үҙенең торлаҡ шарттарын алты миллион кеше хәл иткән: был осор эсендә банк ике миллиондан ашыу ипотека кредиттары биргән, уларҙың дүрттән бер өлөшө 2013 йылда бирелгән. 2014 йылдың ғинуарында Һаҡлыҡ банкы ипотека кредиттары биреү күләменең яҡынса үҫеше буйынса рекорд ҡуйған - 42 миллиард һум. 2013 йылдың ғинуары менән сағыштырғанда был күрһәткес 90 процентҡа артҡан. Әле Һаҡлыҡ банкында йәш ғаиләләр өсөн һәм яңы торлаҡ һатып алыусылар өсөн уңайлы процент ставкалары буйынса акциялар бара.

✓ "Һүҙебеҙ нисек яңғырар..." республика ораторлыҡ оҫталығы конкурсын М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башлап ебәрҙе. Унда 9-11 синыф уҡыусылары ҡатнаша ала. Конкурста ҡатнашыу өсөн 1 апрелгә тиклем тултырылған ғаризаны конкурсты ойоштороу комитетына kaf_oyab-spu@mail.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк. Бәйләнеш өсөн телефондар: 272-23-26; 89174479151. Конкурсҡа йомғаҡтар яһау һәм еңеүселәрҙе бүләкләү 25 апрелдә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында үтәсәк.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ СИФАТ ТАМҒАҺЫ

**"Рәсәйҙә эшләнгән" сифат билдәһенең иң яҡшы логотибына бөтә Рәсәй асыҡ конкурсы булып үтте һәм уға йомғаҡ яһалды. Бишмөйөш эсенә яҙылған "К" хәрефе ошо арала Рәсәйҙә етештерелгән бөтә юғары сифатлы продукцияға һуғыласаҡ.**

Конкурс Рәсәй продукцияһы сифатын раҫлаусы системаһы булдырыу сиктәрендә уҙғарылды. Төп маҡсаттарҙың береһе - эске һәм тышҡы баҙарҙа үҙебеҙҙең продукцияны киң йәйелдереү. Сифат билдәһе тауарға йәки уның төргәгенә төшөрөлә, шулай уҡ ярлыҡтарға һуғыла.

2013 йылдан алып быға оҡшаш проект Башҡортостанда тормошҡа ашырыла. БР Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты "Башҡортостан продукты" билдәһен әҙерләүсе булып тора. Бындай үҙ ирке менән маркалау юғары ҡулланыу сифатына эйә булыусы республика аҙыҡ-түлек тауарҙарын етештереүселәргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән. Проекттың төп маҡсаты - урындағы предприятиеларҙың продукцияһына ҡулланыусыларҙың иғтибарын йәлеп итеү, шулай уҡ уны тышҡы баҙарҙа ла киң йәйелдереү.

Башҡортостан территорияһында урындағы сеймалдан аҙыҡ-түлек етештереүселәргә генә проектта ҡатнашырға рөхсәт бирелә. Шул уҡ ваҡытта "Башҡортостан продукты" билдәһе менән алкоголь продукцияһын, шул иҫәптән һыраны, маркалау рөхсәт ителмәй.

2014 йылда БР Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты "Башҡортостан продукты" проектында ҡатнашыусыларҙың иҫәбен кәм тигәндә 200-гә тиклем еткерергә планлаштыра. Бөгөнгө көнгә сатырлы бренд 75 республика етештереүсеһен берләштерә.

# АҘЫҠ-ТҮЛЕКТЕ - ИНТЕРНЕТ АША

**"БашФермер" - Башҡортостанда етештерелгән тәбиғи һәм таҙа тукланыу продукттарын һатыу һәм килтереп биреү проекты ул. Ул гәҙәти аҙыҡ-түлек магазины түгел. "БашФермер" туранан-тура етештереүселәр - бөтә республика буйынса ауыл халҡы һәм фермерҙар менән хеҙмәттәшлек итә.**

"БашФермер" проекты инициаторы һәм етәксеһе Ләлә Ҡунаҡаева билдәләүенсә, уларҙың аҙыҡ-түлек һатыу буйынса интернет-магазины һәр кем өсөн тәғәйенләнгән. Әммә йышыраҡ "БашФермер" хеҙмәте менән үҙенең ваҡытын һәм аҡсаһын баһалаусылар файҙалана. Ҡағиҙә булараҡ, улар бер-ике балаһы булған ғаиләләр.

-Ауылда етештерелгән аҙыҡ-түлекте һатып алыу Өфө халҡы өсөн әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Йәрминкәләргә йә магазиндарға барыһың да һатып алаһың. Әммә бындай алыш-бирештең ҫур минусы - һатыусы менән кире бәйләнеш булмау, һин уның кем һәм ҡайҙан икәнлеген белмәйһең. Беҙҙең төп өҫтөнлөк - кире бәйләнеш булыуы һәм тәьмин итеүсенең кем икәнлеген белеүебеҙ, һатып алыусылар алдында улар етештергән продукцияның сифаты һәм хәүефһеҙлеге өсөн яуап биреүебеҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Ләлә Ҡунаҡаева.

Проект етәксеһе фекеренсә, хеҙмәттәшлек өсөн иң яҡшы бәйләнеш- ул крәстиән (фермер) хужалыҡтары. Улар үҙ продукцияһын һатыуҙа ҡыҙыҡһыныусанлыҡ күрһәтә генә түгел, ә кәрәк саҡта тиҙ генә продукция төрҙәрен үҙгәртә, ҙур һорау менән файҙалана торғанына алыштыра ала, йәғни улар үҙ эшендә һығылмалылыҡ күрһәтә.

**"Башинформ"дан.**

БАШ ЙОРТТА



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үткәргән матбуғат конференцияһынан ҡайтып, эш урынына килеп тә ултырҙым, кеҫә телефон шылтыраны. Әхирәтем икән. "Ҡарале, сүп-сар контейнеры эргәһенә машинамды парковкалағайным, кисә эштән ҡайтыуыма 4 мең штраф түләргә ҡағыҙ килтереп тотторҙолар. Мировой судка мөрәжәғәт итәйемме икән..."- тип теҙеп китте ул бер тынала. "Хәҙер ҡала хакимиәте машиналарын сүп-сар контейнерҙарына юлды ҡаплап ҡуйған, ҡар таҙартырға ҡамасаулыҡ иткән урындарҙа ҡалдырған автомобиль хужаларына ҡарата ҡәтғи саралар күрә. Хатта автомобилдәрҙе эвакуаторҙар ярҙамында алып китеүҙәре лә мөмкин", - тием. Сөнки матбуғат конференцияһында тап ошо хаҡта ла һүҙ булды.**

# ТОТОРОҠЛОҠ...

## оҫталыҡ билдәһе!

Бөгөн баш ҡалала йәшәүсе һәр өсөнсө кешенең шәхси автомашинаһы бар. Ә инде биш-ете йылдан ул һәр икенсе гражданда буласаҡ. Ошоға бәйле парковка урындарына ҡытлыҡ тыуа ла инде. Әлеге ваҡытта Өфөлә 4,5 мең урам иҫәпләнә. Уларҙың барыһын да ремонтлап, машиналарҙы парковкалау урындары эшләү өсөн тағы ла 5-7 йыл кәрәк буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡала уртаһындағы паркингтар тулыһынса файҙаланылмай. Гараж кооперативтарында барлығы 150 мең урын бар, әммә улар 10-15 процентҡа ғына тулы. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, Өфө урамдарында 10 меңдән ашыу автомобиль "ҡышлаған".

- Баш ҡаланың сауҙа-күңел асыу үҙәктәрендә паркингтар бар. Былтыр Менделеев урамында беренсе күп ҡатлы муниципаль паркинг ҡулланыуға тапшырылды, - ти Ирек Ишмөхәмәт улы. - Ҡала ошо йүнәлештә артабан да эш алып барасаҡ. Төҙөүселәргә лә шундай талаптар ҡуйыласаҡ. Был өлкәлә ыңғай миҫалдар бар.Мәҫәлән, ҡаланың төньяҡ өлөшөндә 999 машинаға паркинг төҙөү планлаштырыла. Шулай уҡ Баҡалы урамында "аҡыллы йорт" концепцияһы буйынса төҙөлгән торлаҡ комплексында бер фатир - бер паркинг принцибы өҫтөнлөк итә. Бындай ғәмәлде муниципалитет та хуплай...

Анализлап ҡарағанда, тимәк, гараж кооперативтары ла, паркингтар ҙа тулы ҡеүәтенә файҙаланылмай. Ә инде автомобиль хужаларына машиналарын әллә ҡайҙа ҡалдырып йөрөүгә ҡарағанда, тәҙрә төбөнә килтереп ултыртыу уңайлыраҡ. Хатта ҡышын йөрөмәгәндә лә, ҡүҙ алдында ултыра бит. Әлегә тиклем коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре һуҡрана-һуҡрана булһа ла йорт ихатаһын таҙарта, сүп-сар контейнерҙарын бушата ине. Хәҙер инде ҡамасаулап ултырған машиналар проблемаһын хәл итеү күпкә еңеләйәсәк, быға тиклем автомобилен бер уйһыҙ ҡайҙа теләй - шунда ҡалдырып йөрөүселәр ҙә, штраф түләй башлау менән, бер аҙ тәртипкә өйрәнә төшөр, моғайын.

Шулай уҡ матбуғат конференцияһында баш ҡалала туризмды үҫтереү тураһында ла һүҙ сыҡты.

- Өфөнө тотош Башҡортостандан айырып ҡарарға ярамай, - тине был хаҡта Ирек Ялалов. - Беҙҙә донъя кимәлендә дан тотҡан шифахана-курорт системаһы нык үҫешкән, донъяға билдәле мәмерйәләребеҙ, шифалы сығанаҡтарыбыҙ бар. Әммә уларға юл тап Өфө аша үтә. Шуға күрә баш ҡала ҡунаҡтары өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу зарур. Былтыр баш ҡалаға турист булараҡ 200-250 мең кеше килгән. Уйлап ҡараһаҡ, республиканан сит илгә ял итергә йәки сит илдәрҙе күрергә күпме кеше сыға, улар менән күпме аҡса ситкә китә. Шуның күпмелер өлөшөн генә үҙебеҙҙә ҡалдырыу өсөн дә эске туризмды үҫтерергә кәрәк.

Бынан тыш, Ирек Ишмөхәмәт улы баш ҡаланың былтыр өлгәшкән уңыштарына, ҡаҙаныштарына туҡталды: "Өфөнөң социаль-иҡтисади үҫеше күрһәткестәре иҡтисадтың төрлө тармаҡтарында ла ыңғай үҫеш һаҡланыуын раҫланы, - тине ул.- Шулай уҡ ҡайһы бер ҡаҙаныштар яңы тулҡын булды. Өфө былтыр Рәсәйҙең 250 эре сәнәғәт үҙәктәре араһында етенсе урын алды. Был күрһәткес буйынса беҙ илдең күп миллионлы ҡалаларын уҙып киттебеҙ. Санкт-Петербург ҡалаһының "Урбаника" территориаль планлаштырыу институты үткәргән рейтинг һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, күпселек миллионлы ҡалалар үҙҙәренең позицияларын түбәнгә төшкән. Ә Өфө тотороҡлолоҡ һаҡлай. Тотороҡлолоҡ - оҫталыҡ билдәһе һәм ҡаланың ҡеүәтле сәнәғәт ҡеүәһе күрһәткесе ул". Бында ҡала округы хакимиәте башлығының һүҙҙәрен ҡеүәтләп, бер нисә һанға ғына туҡталып китеү урынлы булыр, моғайын. 2013 йылда ҡала предприятиеларының килем күләме 118 миллиард һумға етә, йәғни 2012 йылға ҡарағанда 61 процентҡа юғарыраҡ. Был - Рәсәйҙәге иң яҡшы күрһәткес. Халыҡтың йәшәү кимәле лә үҫә. Эре һәм урта предприятиелар буйынса уртаса эш хаҡы 32,3 мең һумға еткән. Был 2012 йыл менән сағыштырғанда 14 процентҡа күберәк. Ыңғай үҙгәрештәр демография күрһәткестәренә лә йоғонто яһамай ҡалмай - былтыр 17,2 мең бала донъяға килгән (2012 йыл менән сағыштырғанда 5 процентҡа күберәк).

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Муниципалитеттың төп бурысы - Башҡортостандың баш ҡалаһын мөмкин булған тиклем уңайлы ҡала итеү, халыҡ үҙен иркен тойған йәшәү мөхитен булдырыу" - ҡала мэрының бөгөн төп эш кредоһы булып ошо девиз тора. Һәм был буш, ялтырауыҡлы һүҙҙәр генә түгел.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өҫтәмә ял көнө Рәсәйҙә 24 февралдән 3 ноябргә күсерелгән. Быйыл Ватанды һаҡлаусылар көнө, 23 февраль, йәкшәмбегә тура килә. Шунлыҡтан, дүшәмбе рәсәйлеләр өсөн законлы ял көнө булырға тейеш ине. Әммә 2014 йылда ял көндәрен күсереү тураһында РФ Хөкүмәте Ҡарарына ярашлы, дүшәмбелә ял көнө 24 февралдә түгел, ә 3 ноябрҙә буласаҡ. "Рәсәйлеләр 22 һәм 23 февралдә ял итәсәк һәм өҫтәмә көн ноябрҙә буласаҡ", - тип хәбәр иттеләр Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәтенән.

✓Башҡортостандың ҡиммәтле тиреләр етештереү буйынса Рәсәйҙең алдыңғы урындарына сығырға бөтә мөмкинлектәре бар. Күгәрсен районындағы "Октябрь" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте Башҡортостанда берҙән-бер ҡиммәтле тиреле йәнлектәр үрсетеүҙә махсуслашҡан предприятие. Был предприятие Рәсәйҙең ҡиммәтле тире етештереүсе 40 предприятиеһы араһында үҙ продукцияһын юғары Европа сифаты итеп маркалау һәм донъялағы биш махсус ҡиммәтле тире аукциондарының береһендә - SagaFurs (Финляндия) ҡуйырға хоҡуҡлы берҙән-бере булып тора.

✓Башҡортостан Милли халыҡ инструменттары оркестрының художество етәксеһе Рәмил Ғәйзуллин "International Kaval Symposium" милли тынлы музыка ҡоралдарына арналған халыҡ-ара симпозиумда ҡатнаша. Форум Истанбулда 20-21 февралдә үтә. Республиканың халыҡ артисы үҙенең ижадында ҡулланған башҡорт музыка ҡоралдары тураһында һөйләйәсәк. Шулай уҡ Рәмил Ғәйзуллин конференцияла ҡатнашыусыларға ҡурай үләненең кипкән һабағынан, көпшәһенән башҡорт музыка ҡоралын әҙерләй торған традицион технология буйынса оҫталыҡ-класы күрһәтәсәк. Сараны Истанбул технология университеты һәм дәүләт консерваторияһы ойоштора.

✓Башҡортостанда 1 синыф уҡыусыларының өҫтәмә аҙналыҡ каникулдары башланды. Улар бөтәһе өсөн дә мотлаҡ, әммә һәр мәктәп уларҙың башланыу датаһын үҙе билдәләй. Өсөнсө ин оҙон сиректең уртаһында өҫтәмә ял аҙнаһы индереү тураһында ҡарар бер нисә йыл элек федераль кимәлдә ҡабул ителә. Быға оҡшаш норма беренсе синыф уҡыусыларын уҡытыуҙы ойоштороуға санитар-эпидемиологик талаптарҙы үтәү менән бәйле. Быйылғы уҡыу йылында республикала 43 меңдән ашыу беренсе синыф уҡыусылары белем ала. Уҡыусылар өсөн яҙғы ял 23 мартта башланасаҡ.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Йылдың беренсе кварталы барлыҡ ойошмаларҙа, коллективтарҙа уҙған йылға йомғаҡ яһау, отчеттар биреү һәм киләсәккә пландар ҡабул итеү, эш йүнәлештәрен билдәләү менән үтә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Милли мәғариф һәм фән буйынса комиссияһы ла ошо көндәрҙә былтырғы эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһап, алдағы көндәргә яңы бурыстар билдәләне.**

# МАҠСАТҠА ЕТЕҮ ӨСӨН...

## тәүге аҙымды яһарға кәрәк!

Комиссия рәйесе Фәнзил Санъяров билдәләүенсә, оптималләштереү һәм башҡа сәбәптәр йылдан-йыл башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен тарайта бара. Хатта шул арҡала БДУ-ның Нефтекама, Бөрө, Сибай, Стәрлетамаҡ филиалдарында һуңғы йылдарҙа филология факультеттарының башҡорт бүлектәренә инергә теләүселәр ҙә кәмене тиерлек. Рәсәй субъекттарында ла телде һаҡлау буйынса эшмәкәрлек ҡатмарлаша бара. Башҡорттар күпләп йәшәгән бер генә төбәктә лә педагогия колледждары ҡалманы. Силәбе университеты филология факультетының башҡорт бүлеге лә эшләмәй. Ырымбурҙа йәшәгән, 35 йәштән кесерәк милләттәштәребеҙҙең өс проценты ғына башҡорт телендә иркен һөйләшә ала. Башҡорт теле буйынса олимпиадала күрше өлкәләрҙән килгән балалар дүрт юллыҡ шиғырҙы ла матур итеп уҡый алмай. Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында Яраткол ауылында башҡорт телен теләк буйынса факультатив рәүештә уҡыталар. Был - бөгөнгө ысынбарлығыбыҙ. Әгәр ҙә артабан да шулай дауам итһә, Рәсәй субъекттарында йәшәгән 600 меңгә яҡын башҡорт бер 10 йылдан музей экспонаты хәлендә генә ҡаласаҡ.

- 2013 йылда комиссияның өс ултырышы үтте, - тине Фәнзил Бүләк улы. - Береһендә Мәғариф тураһындағы законды тикшереп, депутаттар корпусына үҙ тәҡдимдәребеҙҙе индерҙек. Мәҫәлән, бер генә миҫал: законға төҙәтмәләрҙә юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу тураһында беҙ индергән пункт бар ине. Ләкин деуптаттар был төҙәтеүгә ҡолаҡ һалманы. Бына Татарстан депутаттары, республика вуздарында татар телен дәүләт теле булараҡ уҡытылыуы мөмкин, тигән пунктты ҡабул итте. Бөгөн уларҙың барлыҡ, хатта техник уҡыу йорттарында ла татар теле дәүләт теле булараҡ өйрәнелә. Беҙҙең БДПУ был йәһәттән бөтөнөбөҙгә лә өлгө. Уҡыу йортоноң бөтөн факультеттарында ла башҡорт теле уҡытыла. М.А.Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфө филиалында ла шулай...

Телмәр тотоусыларҙың һәр ҡайһыһының сығышында, әлбиттә, башҡорт телен һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү өсөн яныпкөйөү сағылыш тапмай ҡалманы. Әммә тел уҡытыу мәсьәләһендә шуға иғтибар итергә кәрәк: бөгөн тел ике йүнәлештә - туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Туған тел уҡытыу милли телдәр РФ Конституцияһы тарафынан яҡлана. Ошо уҡ нигеҙҙә хәҙер ул Федераль дәүләт белем биреү стандарттары исемлегенә инеп тә өҫтөнлөклө урында ҡала. Ә бына дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу, әлбиттә, хәүеф аҫтында. Сөнки белем биреү өсөн бөгөн дүрт төрлө уҡыу планы тәҡдим ителә. Әлеге ваҡытта милли республикаларҙа, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, икенсе планға өҫтөнлөк бирелә. Сөнки икенсе план төбәк һәм мәктәп компонентын үҙ эсенә ала. Ләкин, һуңғы ваҡиғалар күрһәтеүенсә, республикала ҡайһы бер рус милләтле ата-әсәләр уҡытыуҙы икенсе түгел, ә беренсе план буйынса алып барыуҙы талап итә. Ә беренсе планда дәүләт телдәрен уҡытыу бөтөнләй ҡаралмаған. Уйлап ҡараһаҡ, бөгөн республикала рустар күпселекте тәшкил итә, ә баш ҡалала ғына 131 мәктәптең 120-һе рус мәктәбе булып һанала. Әгәр рус балаларының ата-әсәләре маҡсаттарына өлгәшһә (сөнки уҡытыу планы уҡыу йорто хакимиәте тарафынан, ата-әсәләрҙең (балиғ булмаған балаларҙың законлы вәкилдәре) мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп ҡабул ителә), был инде дәүләт теле булараҡ башҡорт теленең уҡытыу даирәһе тағы ла тарайыуына килтерәсәк. Һәм бөгөн, беренсе план буйынса уҡытырға теләүсе мәктәптәр юҡ, тип ышаныслы итеп әйтеүе ҡыйын. Улар уңайлы мәл еткәнен генә көтә. Бына шуныһы хәүефле лә инде.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Күсәбаев белдереүенсә, Өфө ҡалаһы, Хәйбулла, Илеш, Благовещен, Ғафури, Архангел, Ейәнсура, Бөрйән райондары мәктәптәрендә комиссия ағзалары үткәргән тикшереү һөҙөмтәләре лә хафаландыра. Мәҫәлән, Хәйбулла, Бөрйән районының саф башҡорт ауылдарында математика фәнен, балаларҙы Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләүгә сәбәп итеп, 1-се синыфтан уҡ русса уҡыталар. Бөрйәндә быға өҫтәп, тест һынауҙарының русса булыуына һылтанып, "Тирә-яҡ мөхит" ("Окружающий мир") предметы ла русса уҡытыла. Бөрйәндә был тәжрибәгә ата-әсәләр ҙә ҡаршы була, райондың битараф булмаған кешеләре күтәрелеп сыға. Йыйылышып һөйләшкәндән һуң ғына хәлдәр ыңғай яҡҡа үҙгәрә башлай. Әлбиттә, бөгөнгө хәл-торошта телебеҙҙе, нигеҙҙә, бары тик башҡорт райондарында, башҡорт ауылдарында, башҡорт гимназия-интернаттарында ғына һаҡлап ҡалыу мөмкин булғанда, башҡорт райондарында башҡорт теленә һәм башҡортса уҡытыуға бындай ҡараш булыуы - башҡа һыймаҫлыҡ хәл.

Буранбай Рәфҡәт улы әйтеүенсә, ҡайһы бер осраҡта уҡытыусының ҡануниәтте һәм Төп Законды белмәүе лә башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ уҡытыуҙа ҡаршылыҡ булып тора. Күңелдәре төшөп, аптыранып мөрәжәғәт иткәндә, ошо ҡанундарҙағы статьяларҙы ҡулдарына тотторып, аңлатыу эштәре алып барғанда, улар ҡанатланып, илһамланып ҡайтып китә. Шулай уҡ ата-әсәләр араһында аңлатыу эштәрен алып барыу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә.

Бында тағы шуны ла билдәләп китмәү мөмкин түгел: ошо көндәрҙә "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашыусы башҡорт, татар теле уҡытыусыларының түңәрәк ҡоронда ҡатнашырға тура килде. Шунда бер татар теле уҡытыусыһы белдереүенсә, төрлө предмет уҡытыусыларының башҡа предметтарға лояль ҡарашы һәм белем биреүҙә программа сиктәренән сыҡмауы ла туған һәм дәүләт телдәрен уҡытыуҙа, һаҡлап ҡалыуҙа ҙур роль уйнай. Быны дәлилләп, конкурсант шундай миҫал килтерҙе: мәҫәлән, рус теле уҡытыусыһы үҙенең предметын туған тел булараҡ уҡытыуға бүленгән сәғәттәрҙә, балаларҙы Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләү программаһы буйынса уҡыта икән, әлбиттә, башҡа милләт балалары ла үҙенең туған теле дәрестәренә түгел, рус теле дәресенә инергә мәжбүр буласаҡ. Бында инде тап уҡытыусы менән эшләргә кәрәк...

Барлыҡ сығыш яһаусыларҙы тыңлағандан һуң, ултырыш һуңында шундай һығымта яһалды: Милли мәғариф һәм фән буйынса комиссия ағзалары исемлеген киңәйтеү һәм структур үҙгәрештәр индереү, йәғни комиссияның эшмәкәрлеген секцияларға бүлеп алып барыу зарур. Мәҫәлән, балалар баҡсаларында эшләүселәр үҙҙәренең секцияһын булдыра, үҙ планы буйынса эшләй. Дөйөм белем биреү мәктәптәре, гимназия-лицей-интернаттар, урта, юғары белем биреү учреждениелары буйынса ла шундай уҡ секциялар ойоштороорға мөмкин һәм улар, комиссия рәйесе нимә әйтер, тип көтөп ултырмайынса, үҙҙәренең планы буйынса эшләп, кварталға йәки ярты йылға бер тапҡыр эшләнгән эштәре буйынса отчет бирергә тейеш. Был тәҡдим комиссия ағзалары тарафынан бер тауыштан хупланды.

**Әйткәндәй...**

**Психологияла шундай һорауһынамыш бар: А пунктынан Б пунктына барып етеү өсөн тәү сиратта нимә эшләргә кәрәк? Әлбиттә, иң тәүҙә беренсе аҙымды яһарға. Эйе, һәр өлкәлә беренсе аҙым яһау өсөн ҡанундар ҙа, хоҡуҡтар ҙа бар. Ә беҙ эште беренсе аҙымдан түгел, ә тотош йоторға теләп башлайбыҙ һымаҡ. Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләһенә килгәндә, бер генә миҫал килтермәксемен: "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законына ярашлы, республиканың дәүләт органдары һәм ойошмаларында (тимәк, йәмәғәт ойошмаларында ла) дәүләт телдәре һәм башҡа телдәрҙең ҡулланылышы тураһында статья бар. Шуға ҡарамаҫтан, хатта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты үҙенең ултырыштарына, йыйылыштарына саҡырыу хаттарын, ни өсөндөр, башҡорт телендә түгел, ә "оло ағай" телендә яҙыуҙы хуп күрә. Ә бит телде һаҡлау, башҡаларға өлгө күрһәтеү тап шул бәләкәй генә күренгән ҡағыҙ кисәгенән башлана. Юҡһа, һаман да бер төрлө уйлайбыҙ, икенсе төрлө һөйләйбеҙ, өсөнсө төрлө эшләйбеҙ...**

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Артрит

❖ Медицина үте, глицерин, нашатыр спирты, бал, йодты тигеҙ өлөштә алырға. Бер тәүлеккә һыҙлаған урынға һөртөп, бәйләп ҡуйырға.

❖ Меңъяпраҡ, һары мәтрүшкә, эт дегәнәге (череда), быуын сәскә (цикорий), һарыгүҙ (золототысячник), күгүлән (спорыш) үләндәренән яһалған үлән төнәтмәһен көнөнә 3 тапҡыр, ашар алдынан яртышар стакан эсергә.

❖ 2 йомортҡа һарыһы, 100 грамм алма һеркәһе, 100 грамм аҡ майҙан мазь яһарға. Һыҙлаған урындарға компресс яһарға.

❖ Ҡара икмәк йомшағы, бал, 4-5 тамсы спирт ҡушып, мазь яһарға. Шулай уҡ компресс эшләргә.

❖ Айыутабан (аконит) үләненең спирттағы төнәтмәһе бөтөн төр ауыртыуҙарҙы, артрит ваҡытында быуындар һыҙлауҙы, радикулитты бөтөрә.

❖ 50 мл кәрәсин, стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә көнбағыш майы, дүрттән бер өлөш кер һабыны, тулы булмаған бер балғалаҡ аш содаһы. Компоненттарҙы мазь барлыҡҡа килгәнсе болғатырға, йылы урында 3 тәүлек торорға. Йоҡлар алдынан 1 балғалаҡ самаһы майҙы һыҙлаған урынға тулыһынса һеңгәнсе һөртөргә. Берәй туҡыма менән урап ҡуйырға. Иртән йылы һыу менән йыуырға.

❖ Саған япрағы һәм ботаҡтарынан яһалған ванна быуындар һыҙлауын бөтөрә. Бындай ванналарҙы 5-6 тапҡыр ҡабул итергә. Бер кәстрүл һыуға япраҡлы 5-6 саған ботағы алына, 2-3 минуттан күп ҡайнатырға ярамай.

❖ Төнгөлөккә һыҙлаған тубыҡты аҡ шыршы (пихта) майы менән ышҡыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә.

❖ Азот кислотаһы йәки араҡы - 100 грамм, ҡайнар һыу - 100 грамм, нашатыр спирты - 120 грамм, скипидар - 60 грамм, сусҡа майы - 30 грамм, ҡаҙ майы - 30 грамм, зәйтүн майы - 50 грамм. Ошоларҙы ҡушып, мазь яһарға. Һыҙлаған урындарға һөртөргә.

❖ Ҡоро камфара - 50 грамм, гәрсис - 50 грамм, спирт - 10 грамм, йомортҡа - 6 дана. Мазь яһарға. Төнө буйы бер нисә тапҡыр 15-әр минутҡа һөртөргә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ерҙән тейенгән ауырыуҙарға (һейҙек-енес ағзаларына, аяҡҡа) им-том

3. Ерҙән һалырға дөрөҫ өйрәнергә кәрәк. Аяҡтар, янбаштар йә тубыҡтан киҫеп ауыртҡанда, кинәт кенә тороп китеп булмай. Уны аҡшам ваҡытында өшкөрәләр. Уға өс йән: тараҡан, ҡандала, тағы ла берәй ҡорт алып һыуға һалалар, һыуҙы өшкөрөп, "Аятел көрси"ҙе киреһенсә уҡып, ауыртҡан ерҙәрҙе шул һыу менән һыйпайҙар. Сирле кешене һыйпап алған һыуҙы өшкөргән имсе әбей юл айырмаһына илтеп һала. Быны ул аҡшам ваҡытында башҡара. Барғанда уға һүҙ ҡушырға ярамай. Шулай итеп, ерҙән тейенгән булһа, кеше аяҡлы була ла китә. "Аятел көрси"ҙе яҙып алып, киренән уҡырға кәрәк.

4. Ерҙән һала торған һыуға "йән өсөн йән" тип, тараҡан, тоҙ һалаһың. Шунан билеңдән өс ҡабат әйләндерергә кәрәк.

5. Ерҙән тейенгәнен кеше үҙе белһә, имләгән һыуҙы шул ете сатлымы, өс сатлымы юлға алып барып ташлай икән.

6. Ерҙән тейенгән булһалар, һыуға төкөрөк, сәс, тырнаҡ һалып, билдән өс тапҡыр әйләндереп, шул һыуҙы һәм әйберҙәрҙе ергә илтеп күмгәндәр. Шунда:

*Мине тотма, шуны тот,*
*Минән яулыҡ, һинән һаулыҡ,*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит.*
*Ерҙән килһәң, ергә кит,*

- тип һамаҡлағандар. "Ер кендеге бер булыр", тигәндәр.

7. Себеште атап һуйып, ҡанын һөрткәндәр, ашамай ергә күмгәндәр.

8. Йомортҡаны һулаҡайға билдән әйләндерәләр, ерҙән тейенгәндән доға уҡып, кеше күрмәгән ергә барып, баш осонан ырғытып: "Мине тотма, шуны тот", - тип ҡайтып китәһең. Ырғытҡанда ете төрлө әйбер һалалар тип тә әйтәләр. Мәҫәлән: йомортҡа, һыу тараҡаны, себен, тырнаҡ, күлдәк, иҫке күлдәк һ.б. Барғанда ла, ҡайтҡанда ла һөйләшергә ярамай. Юлда кеше осраһа, биткә шәл ҡаплайһың. Доғалар уҡый-уҡый барырға кәрәк.

9. "Күрше ҡыҙы мал һуйған ергә йығылғайны. Шунан шул урынды ҡаҙып, мунсала мунса ташын, кирбес, ат дағаһын ҡыҙҙырҙыҡ. Мунсала һыу ҙа йылына бит инде. Шул таштарҙы, дағаны, кирбестәрҙе ҡаҙған соҡорға һалдыҡ. Уның өҫтөнә таҡта ҡуйып, ауырыуҙы шул таҡтаға ятҡырып, өҫтөн бөркәнек. Соҡорҙо ышыҡлап, быуы сыҡмаһын тип, мунсалағы йылы һыуҙы шул таштарға ҡойҙоҡ. Быу сығып китә. Ете көн быуҙа тотоп имләнек. Ҡайтып еткәнсе ҡулдары йөрөй башланы", - тип һөйләне М. Хәкимова Әрәкәй ауылынан.

10. Имсе әбей: "Ҡапҡа төбөндәге балсыҡты ҡулыңа бәйләп ят та, иртән кире шунда сығарып һал", - тине. Шулай бәйләп яттым. Шулай иткәс, ҡулдың шеше бөттө. Өшкөрмәне лә, терелгәнсе ят, терелмәҫ борон йөрөмә, тине. Әбейҙе тыңланым. Шешем бөттө", - тине Шөкөрҙән С.Хәбибова.

**Им иткән һабаҡ.** Ерҙән тейенгәндә им иткән һабағын белергә кәрәк. Һабағын уҡый белгән кеше булһа, сир бөтә. Им иткән һабаҡтарҙы әүәле беләләр ине.

**Им иткән һыу.** Им иткән һыуҙы ҡапҡа соҡоро төбөнә һалалар.

## Һейҙек ҡыуығы шешеүенә им

1. Кеше ағас көйәнтәне аша атлап сыҡһа, һейҙек тотмау менән ауырый. Шуға күрә, көйәнтәне аша атларға ярамай. Ауырыһаң, ауырыуҙы миндеккә ебәреү алымы ҡулланыла. Ауырыған кеше арты менән ҡиблаға ултыра ла миндеккә кесе яраү итә. Шул миндекте баш аша ташлай. Уны ташлағанда уҡына.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*ХӘТЕРКИТАП*

**"Һуғыш күптән тамамланһа ла, бер-береһен йылдар дауамында, хатта ғүмер буйы эҙләгәндәр бар..." Бер яугирҙән ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс, оҙаҡ уйланылды. Ысынлап та, ҡанлы, дәһшәтле Бөйөк Ватан һуғышы күпме ғүмерҙәрҙе өҙгән, ғаиләләрҙе юҡҡа сығарған, балаларҙың атайҙарын тартып алған.**

# АТАЙ ҠӘБЕРЕНӘ...

## оҙайлы юл

Башҡортостан егете кесе лейтенант Ғәле Ғәзиз улы Ғәзизов та һуғыш башланыу менән яуға атлыға. Хәрби комиссариат тупһаһын тапай торғас, яратҡан ҡатыны, алмалай ике балаһы Фина менән Ринатты ҡалдырып, 1942 йылда фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышҡа китә. Тылда ҡалғандарға ла еңел булмай: ауыр хеҙмәт, ут эсендә йөрөгән ҡәҙерлеләре өсөн борсолоу, ауылға көн һайын тиерлек килгән "ҡара ҡағыҙ" - һәр кем йөрәген усына тотоп йәшәй.Ҡайғы Ғәзизовтар ғаиләһен дә аямай. Кесе лейтенант Ғәле Ғәзизовтың һәләк булыуы тураһында бер түгел, ике "ҡара ҡағыҙ" килә. Уның береһендә яугирҙың Украинала Каменец-Подольск янында, икенсеһендә Хмельницкий өлкәһе Староконстантинов районы Веснянка ауылында 1944 йылдың 6 мартында һәләк булыуы тураһында хәбәр ителә. Ғәле Ғәзиз улының тормош юлдашы тәүҙә ике "ҡара ҡағыҙ" килгәс, "Бәлки, яңылышҡандарҙыр, ҡайтыр ул, ҡайтыр..." тигән өмөттә йәшәй. Һуңынан инде: "Исмаһам, ҡәберенә тупраҡ та һала алманым бит",- тип аҙарына.

Йылдар үтә. Ҡыҙы Фина Ғәле ҡыҙы (ул Ҡуянтау ауылында йәшәй) һәм улы Ринат аталарының ерләнгән урынын табыуға өмөтөн өҙмәй, төрлө архивтарҙа соҡона, хаттар яҙа. Фина Ғәле ҡыҙының улы Марсель да был эшкә әүҙем тотона. Ул ҡартатаһының Украинала барған дәһшәтле яуҙарҙың береһендә һәләк булыуын белгәс, интернет селтәре аша ошо төбәктә йәшәгән кешеләргә мөрәжәғәт итә. Марсель социаль селтәрҙәрҙә Украинаның Базалия ҡасабаһында йәшәгән Валентина Королева һәм Светлана Власенко менән таныша. Улар Марсель Билаловтың һорауы буйынса ике ауылда ла булған мемориалды фотоға төшөрөп ебәрә. Һөҙөмтәлә, Елизаветполь ауылы һәйкәлендә кесе лейтенант Ғәзизовтың да фамилияһы табыла! Ғүмере буйы атаһы тураһында мәғлүмәт эҙләгән Фина Ғәле ҡыҙының хис-тойғоларын һүҙ менән аңлатырлыҡ түгел. Ул улы Марсель менән юлға йыйына башлай.

Киевта Башҡортостан ҡунаҡтарын Светлана Власенко ҡаршы алып, йортона - Базалия ҡасабаһына алып ҡайта. "Беҙҙе шул тиклем ихлас ҡабул итерҙәр тип уйламағайныҡ. Беҙҙең килеүебеҙҙе бар ҡасаба халҡы белеп, ысын күңелдән тәбрикләне. Гальченицк мәктәбе директоры Лидия Кузьминична Елизаветполь ауылына алып китте. "1944 йылдың 6 мартында ауылды фашист илбаҫарҙарынан азат иткәндә һәләк булған яугирҙарға мәңгелек дан!" тигән яҙыу ҡуйылған, минең атайымдың да исеме уйылған Туғанлыҡ ҡәбере ауылдың үҙәгендә урынлашҡайны. Хәрби мемориал янындағы майҙанға мәктәп уҡыусыларының почетлы ҡарауылы ҡуйылды, клубта шул яуҙың шаһиттары булған оло быуын кешеләре йыйылды..." тип һөйләй Фина Ғәле ҡыҙы.

Василий Мушинский хәтирәләренән: "Миңә ул саҡта 17 йәш ине. Бындағы ҡанлы яу әле лә хәтеремдән сыҡмай. Беҙҙең һалдаттар фашистарҙың танктары, пехотаһы менән аяуһыҙ һуғышты. Яугирҙарыбыҙ күп ҡырылды. Фашистарҙың танкылары тәрән булмаған окоптарҙа ятҡан һалдаттарҙы тапап, иҙгесләп үтте. Тәүҙә уларҙы ауыл осонда ерләнек, бер нисә йылдан ҡәберҙәрен сиркәү янына күсерҙек. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында һәйкәл ҡуйҙыҡ, яугирҙарҙың исемдәрен яҙҙыҡ. Уларҙың исем-шәрифтәрен Елизаветполь һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең эҙәрмәндәре билдәләне".

Галина Дацюк: "Беҙ, эҙәрмәндәр, хәрби комиссариаттарға, хәрби архивтарға, һәләк булған яугирҙарҙың туғандарына хаттар яҙҙыҡ. Һалдаттарҙың исем-шәрифтәре яҙылған һуңғы ике плитәне 80-се йылдарҙа ҡуйҙыҡ. Ул саҡта мин мәктәп директоры булып эшләй инем. Беҙҙең мәктәпте япҡанға һигеҙ йыл да үтеп китте. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында бер нисә быуын уҡытыусылар һәм уҡыусылар туплаған мәғлүмәтте әле лә ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ. Ул киләсәктә ла һаҡланырға тейеш".

Светлана Власенко ҡунаҡтарға "Навечно в памяти народной" китабын бүләк итә. Унда штабтан килгән төрлө бойороҡтар, отчеттар теркәлгән, улар ярҙамында Украинаны азат иткән совет һалдаттарының ҡаһарманлығын күҙалларға була. Бына шуларҙың береһе: "6 мартта бригада 9.10 сәғәттән 16.00 сәғәткә тиклем дошмандың 4 контратакаһын кире ҡаға. Елизаветполь янында фашистарҙың контратакаһы айырыуса көслө була. Беҙҙең батальонға ҡаршы 6-сы танк дивизияһы түгел, ә "Адольф Гитлер" тип аталған "Тигр" маркалы танк дивизияһы сыға. 1-се мотоуҡсы батальонының пулемет ротаһы фашистарҙың танктарын үткәреп, уларҙың артынан эйәреп килгән 350 дошман пехотаһын юҡ итә. Быны күргән фашист танктары кире борола һәм беҙҙең пулемет ротаһына ҡаршы ут аса, уларҙы тапап үтә. Һөҙөмтәлә, бар пулемет ротаһы, командирҙары өлкән лейтенант Шкляр менән бергә, һәләк була. Фашистарҙың юғалтыуы: 5 танк шартлатылған, 600-гә тиклем фашист үлтерелгән һәм яраланған. Беҙҙең бригаданың юғалтыуы: 103 кеше үлтерелгән, 179-ы яраланған, 3 орудие, 8 танк пулеметы, 11 ПТР мылтығы, 16 ҡул пулеметы юҡ ителгән.

**70-се мехбригаданың штаб начальнигы подполковник Марченко. Штаб начальнигы урынбаҫары Беликов".**

Ошо ҡурҡыныс, ҡанлы яуҙа һәләк булған 103 ҡаһарман яугир араһында Ғәле Ғәзиз улы Ғәзизов та була.

- Украиндар беҙҙе бер туғаны кеүек ҡабул итте. Ғөмүмән, Украинала фашистарға ҡаршы ҡаһармандарса һуғышҡан һалдаттарҙы бик тә ихтирам итеүҙәренә шаһит булдыҡ. Яугирҙарҙың Туғандар ҡәберлегендәге таҙалыҡты, тәртипте күреп һоҡландыҡ. Сөнки был ҡәберлекте украиндар изге урын тип ҡабул итә. Шуға күрә атайымдың рухы өсөн тынысланып ҡайттым. Һуңғы йылдарҙа Украина халҡы фашистарҙы аҡлай, беҙҙең яугирҙарҙың ҡәберлеген емерә, тигән хәбәр йыш ишетелә. Кеше ышанмаҫ хәбәр һөйләп, тарихта ҡалырға маташҡан бер төркөм өсөн генә туғандаш милләткә яла яғырға ярамай, - тине күҙ йәштәре аша Фина Ғәле ҡыҙы.

Фина Ғәле ҡыҙының украиндар менән бәйләнеше дауам итә. Светлана Власенко аша ул күңеле ҡабул итеп алған уртаҡ таныштары тураһында белешә, телефон аша йыш һөйләшәләр. Фина Ғәле ҡыҙы мөләйем ханымдың үҙен Башҡортостанға ҡунаҡҡа саҡырғас, Светлана саҡырыуҙы ҡабул итеп, Баймаҡҡа килеп ҡайта. Шулай, башҡорт ғаиләһе менән украин ҡыҙы айырылмаҫ дуҫтар булып китә. Фина Ғәле ҡыҙы өсөн атаһының ҡәберен ҡәҙер итеп һаҡлаған бар украин халҡы ғәзиз. Уның хыялы - тағы ла Украинаға сәфәр ҡылыу.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**



✓ *Күрәһең, һаҙаҡ бер ваҡытта ла буш торорға тейеш түгел, тигән йолаһы булғандыр. Әйткәндәй, директор, был һаҙаҡтың берҙән-бер булмауы, уларҙа тағы ла ана шундай өс дана һаҙаҡ һаҡланыуы тураһында ла әйтте.*



*АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

# РӘСӘЙ ӨСӨН БАШЫН ҺАЛҒАНДАР,

## йәки Беренсе донъя һуғышы геройы, башҡорт генералы Рауил Сыртланов тураһында



**Рус армияһы һалдаттары. Беренсе донъя һуғышы.**

Иртәгәһенә Скробово янында тағы ҡанлы яуҙар башлана. Рус ғәскәрҙәре ҙур юғалтыуҙар аша дошмандың "Ферденанд моронон", Дальнее һәм Горное Скробово ауылдарын ала. Беҙҙең ҡулға 4 мең әсир һәм 15-ләп орудие төшә. Әммә был операцияла 4-се армиянан 80 мең кеше үлә һәм яралана. Ғәскәрҙәрҙең уңышһыҙлыҡҡа тарыуын күреп, Көнбайыш фронты командалығы һөжүмде 25 июнгә күсерергә ҡарар итә. 26 июндә Ставка Көнбайыш фронтҡа дошманды алған позицияларҙа тоторға бойора һәм төп ударҙы генерал Брусиловҡа йөкмәтә.

Шулай итеп, 4-се армия командалығының йүнһеҙлеге арҡаһында рус ғәскәрҙәре мәғәнәһеҙ һөжүм һөҙөмтәһендә 80 мең яугирын юғалта. Ҡанлы яуҙарҙың иң ауыры индәренә төшкән 42-се пехота дивизияһының дүрт полк командиры ла, шул иҫәптән, башҡорт офицеры, 166-сы Ровно пехота полкы командиры Рауил Сыртланов та ҡаһармандарса һәләк була. 20 июнь көнө уға генерал-майор дәрәжәһе бирелгән була. Ҡаһарман башҡорт генералын тыуған ягы Шланлыкүл ауылына алып ҡайтып ерләйҙәр. Әйткәндәй, шул уҡ Көнбайыш фронтында уның ҡустыһы капитан Йософ Сыртланов һуғыша. Ул айырым 1-се Ивангород ауыр артдивизионында хеҙмәт итә. 1916 йылда күрһәткән батырлыҡтары өсөн Георгий ҡоралы (ҡылыс) менән бүләкләнә. Рауил ағаһының һәләк булғанын белгәс, Йософ Сыртланов уны үҙе алып ҡайтып ерләгәндәр, ахыры.

Ватан өсөн йәнен фиҙа ҡылған башҡорт офицерының ҡаһарманлығын батша хөкүмәте юғары баһалай. Уға 1917 йылдың ғинуарында Рәсәй империяһының иң юғары хәрби наградаһы - 4-се дәрәжәләге Изге Георгий ордены бирелә. Христиан диненән булмаған офицерҙарға бирелгән ордендың уртаһында Изге Георгий (һөңгө тотҡан һыбайлы) урынына Рәсәй империяһы гербы төшөрөлгән (һүрәтте ҡарағыҙ). 1846 йылдан алып Изге Георгий ордены кавалерҙары исемдәре Мәскәүҙәге Оло Кремль һарайының Георгий залында мәрмәр таҡтаға яҙылып барған. Тимәк, унда Р.Сыртлановтың да исеме яҙылған булырға тейеш. Ҡаһарман башҡорт генералы Рауил Сыртланов башҡорттар араһынан ошо юғары орденға лайыҡ булған беҙгә билдәле берҙәнбер кеше. Бәлки, беҙ белмәгәндәре лә барҙыр.

1917 йылғы революциянан һуң Граждандар һуғышы майҙанға яңы геройҙарҙы сығара, унын һуң Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары... Ә бына Бөйөк һуғыштың (революцияға тиклем Беренсе донъя һуғышы шулай атала) геройҙары онтолоп ҡала, шул иҫәптән башҡорт генералы Сыртлановтың ҡаһарманлығы ла онотолоуға дусар була.

Әйткәндәй, быйыл Беренсе донъя һуғышының башланыуына 100 йыл тула. Ошо айҡанлы Рәсәй кимәлендә Бөйөк һуғыш ҡаһармандары иҫтәлегенә бағышланған саралар үткәреү, һәйкәл асыу ҡаралған. Бынан тыш, 2012 йылдың 29 декабрендә Рәсәй Президенты В.В. Путин указы менән Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте (Российское военно-историческое общество) ойошторолдо. Беренсе донъя һуғышының 100 йыллығына арналған сараларҙы үткәреү бурысы тап ошо ойошмаға йөкмәтелгән (сайтын ҡарағыҙ: rvio.ru ). Ошо айҡанлы быйыл беҙҙә лә ҡаһарман генерал Рауил Сыртлановтың исемен мәңгеләштереү буйынса саралар атҡарылһа, тыуған ауылы Шланлыкүлдә һәм район үҙәге Бүҙәктә иҫтәлеккә таш ҡуйылһа, батырҙың исеме халҡына ҡайтыр ине. Был эшкә Бүҙәк районы хакимиәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башкарма комитеты һәм Рәсәй хәрби-тарихи ойошмаһының Башҡортостан бүлексәһе тотоноп, атҡарып сығарһалар, бик урынлы буласаҡ. Әйткәндәй, генерал Рауил Сыртлановтың исемен мәңгеләштереү йәһәтенән тәүге аҙым эшләнде лә инде: уның тураһындағы мәҡәлә "Военная история башкир" исемле (2013 йыл сыҡты) энциклопедияла урын алды. Ҡаһармандың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү эше бының менән генә сикләнмәҫ, тип ышаныс килә.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**
**(Аҙағы. Башы 6-7-се һандарҙа).**

*АЛЫҪТАН КИЛГӘН ХӘБӘР*

# УҠ-ҺАҘАҠҠАЙ АША...

## йылдар ауазы килә

**(Башы 1-се биттә).**

Составында, тарихсы Рәмил Рәхимов һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡа подразделениелар иҫәбендә 1,2,9,11,15-се башҡорт полктары булған рус ғәскәрҙәренә, шулай уҡ австралийҙар менән пруссактарға ҡеүәтле нығытманы яулау бурысы тора. Кисекмәҫтән штурм башлауҙың ниндәй ҡан ҡойош менән бөтөрөн күҙаллап, тәүҙә уны артиллерия утына тотоп алыу хуп күрелә һәм "Петерсберг"өҫтөнә өс көн буйы пушкаларҙан ут яуҙырыла. Нығытма яна, емерелә, ләкин бирелмәй. Ниһайәт, һөжүм итеүселәр емерек стеналар аша ҡалаға бәреп инә башлай. Ҡала шул мәл бер-береһенә ҡара-ҡаршы торосуы ике өлөшкә бүленә. Бер аҙҙан нығытма һаҡсылары, һуғышсан рухтары әле көслө булыуға ҡарамаҫтан, артабан ҡаршы тороу мәғәнәһен юғалта башлай, сөнки Европала булып үткән оҙайлы һуғыштарҙан миктәгән һалдаттар Наполеондың енелеүен аңлай һәм был мәғәнәһеҙ алышта баштарын һалғылары килмәй. 1814 йылдың 31 мартында союздаштар ғәскәрҙәре Париж урамдарына бәреп инә. Ә шунда ла әле Эрфурт бирешергә теләмәй, әммә ләкин 5 майҙа французлар аҡ флаг күтәрергә мәжбүр була. 22 майҙа яралы француз һалдаттарын тейәгән һуңғы ылау Эрфуртты ташлап, Парижға ҡайта.

Бынан һуң нығытма емереклектәрендә байтаҡ һуғыш "сувенирҙары" ҡалдырып, беҙҙекеләр ҙә Тыуған илебеҙгә табан юл ала. Ана шул әле әйтеп киткән яу ҡомартҡыларының береһенә - башҡорт атлы уксылар яугирының уҡ-һаҙағына (ҡалъян, ҡорман) юлыҡтым мин Эрфурт ҡала музейында булғанда. Быяла аҫтындағы ошо уникаль экспонатты күреп, таң ҡалыуымды белһәгеҙ ине! Ике быуат ваҡыт үтһә лә, ул бик яҡшы һаҡланған, хатта дары еҫе аңҡып торған ҡалын тиренән эшләнгән был һаҙаҡҡа ялтырап торған еҙ биҙәүестәр баҫып төшөрөлгән, эсендә - өс уҡ. Уларҙың береһе башҡаларынан айырылып тора: ҡауырһынлап эшләнгән осондағы шыма һөйәк пластинкала семәрле яҙыуы бар. Уҡ - ҡорал, һаҡлай торған әйбер түгел, уны былай биҙәү нинә кәрәк булды икән, тип тәүҙә аптырай төшкәйнем. Музей директоры менән һөйләшкәндә ул бындай бер уҡты яугир, моғайын, гел үҙе менән бергә тылсым билдәһе, талисман итеп алып йөрөгәндер, тигән фараз әйткәс, уның менән килештем. Күрәһең, һаҙаҡ та, янсыҡ кеүек уҡ, бер ваҡытта ла буш торорға тейеш түгел, тигән йолаһы булғандыр. Әйткәндәй, директор, был һаҙаҡтың берҙән-бер булмауы, уларҙа тағы ла ана шундай өс дана һаҙаҡ һаҡланыуы тураһында ла әйтте.

Үкенескә күрә, был һаҙаҡтарҙың музейға килеп әләгеү тарихын төпсөргә теләк бик көслө булһа ла, ашығыуыбыҙ сәбәпле, ентекләберәк һораша алманым. Ләкин тиҙ араларҙа Эрфуртҡа янынан барып, мине тетрәткән был уҡ-һаҙаҡ хаҡында тағы ла күберәк белермен, тигән өмөттәмен. Әлегә был ваҡиға тураһында яҡташтарыма еткерә торайым, тинем.

**Нәсүр ЙӨРӨШБАЕВ,**
**журналист,**
**режиссер-кинооператор.**
**Саксония.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Башҡорт ир-егеттәренең билбаулы эске кейеме булып ыштан торған. Бынан тыш, улар уның өҫтөнән салбар кейгән. Беселеше һәм тегелеше буйынса улар ыштандан әллә ни айырылмаған, ләкин уң яҡ ҡабырғаһында кеҫәһе булған. Салбарҙы тупаҫ киндер туҡыманан йәки буҫтауҙан теккәндәр. Уны нигеҙҙә эш ваҡытында, туҡыманан тегелгәнен - йылдың йылы ваҡытында, буҫтауҙан тегелгәнен ҡышын кейгәндәр. Салбар шул тиклем киң, уларға бөтөн өҫ кейемен тығып ҡуйырға була.

Төньяҡ, әйле һәм көҙәй башҡорттарында ирҙәр ыштанының тағы бер төрөн күргергә тура килде - ул йөш кәләштен иренә бүләге. Был ыштандар төҫлө, нигеҙҙә ҡыҙыл туҡыманан тегелеп, төрлө төҫтәге ептәр менән ҡайыла.

XX быуат башында башҡорттар тирене бик һирәк эшкәрткән һәм сарыҡтарҙы ыҫмалаланған еп менән теккәндәр. Ирҙәр сарығының үҙенсәлеге булып ҡуңысының түбәнге өлөшөнә тегелгән бейек булмаған күн һәм биҙәү өсөн өсмөйөшлө бер нисә күн киҫәге торған. Өҫкө яктан улар ҡатынҡыҙҙар сарығы кеүек уҡ балтыр өҫтөнән ҡыҫмау, ҡуңысбау менән бәйләп ҡуйылған. Сарыҡтың эске яҡтан табанына һаламдан йәки күрәндән табанса һалынған. Башҡорттар һәр ерҙә кейеп йөрөгән итек (һүрәт, а) йылҡының иләнмәгән (ҡоба) тиренән тегелгән. Уның олтаны ҡалын булған һәм бейек булмаған үксә ҡағылған; итектең башы киң һәм тура, ҡуңысы тубыҡҡа тиклем. Бай башҡорттар йомшаҡ итектәрҙе - ситекте бары тик өйҙә генә кейгән, өйҙән сыҡҡанда ситек өҫтөнән күн туфлиҙар - гәзәти ҡата ҡатҡандар (һүрәт, б) йәки арты булмаған кибес йәиһә резина галуш кейгәндәр. Бынан тыш, башҡорттарҙа үҙҙәре теккән ҡалын табанлы, үксәһе ҡаҙаҡ йәки дағы менән нығытылған күн галуштар ҙа ҡулланылған (һүрәт, в).



Киң таралыу алмаған махсус аяҡ кейеме - бышымлы сабата, бышымлы ҡынйыраҡ та булған. Бышымлы сабата - шул уҡ сабата, әммә ҡалын йүкәнән үрелә, туҙ менән көпләнә, өҫкө һәм тирә-яғына аяҡты урап бәйләп ҡуйыу өсөн туҡыма тегелә (һүрәт, а). Улар бигерәк тә төньяҡ-көнбайышта осрай һәм бышымлы ҡынйыраҡ кеүек, ҡышҡыһын һунарға, саңғыла йөрөгәндә, эш башҡарғанда кейелә. Бышымлы ҡынйыраҡ тиренән һәм уны урап тегелгән туҡыманан тора (һүрәт, б). Улар сабата кеүек уҡ кейелә, табансаһына һалам йәки үлән һалына. Атап үтелгән аяҡ кейемдәренән тыш, башҡорттарҙа ҡышҡыһын быйма йәки быйма башы ла ҡулланылған.



Бәйләм ойоҡ һәм тула ойоҡтан тыш, башҡорт ир-аттары кейеҙ ойоҡ кейгән. Был ойоҡ аҡ һарыҡ йөнөнән баҫылған һәм бары тик ҡышын ғына кейелгән. Ойоҡ менән бер рәттә сылғау ҙа урағандар. Итек кейгәндә ҙур булмаған ҡыҫҡа сылғау ҡулланһалар, сабата кейгәндә оҙонона - ыштар - өҫтөнләк биргәндәр. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа кейәү ҡыҙыл туҡыманың сите сигелгән - селтәрле сылғау урап йөрөгән.

***✓ Элек беҙҙе атай-әсәйҙәр "Насар уҡыһаң, тәртипһеҙ булһаң, армияға алмайҙар", тип ҡурҡыта ине. Өйҙә, мәктәптә, матбуғат сараларында ил һаҡсыһын, һалдатты иң идеаль кеше итеп һүрәтләйҙәр ине.***

# ҠАЛҠАН БУЛЫРҘАЙМЫ ИР-ЕГЕТТӘР...

## иле, ере-һыуы, яҡындары өсөн?

**Ватанды һаҡлаусылар көнөн беҙ ирҙәр байрамы итеп ҡабул итәбеҙ, башлыса уларҙы ҡотлайбыҙ һәм улар тураһында һөйләйбеҙ. Бына әле лә Бөрйән район хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитеты рәйесе Ғайса ХӘЛИТОВ һәм Сибай ҡалаһындағы әүҙем авторыбыҙ, отставкалағы подполковник Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ менән ситтән тороп диалог ҡороп, ир-егеттәргә төбәй торған иң актуаль бер-нисә һорауыбыҙҙы бирҙек. Түбәндә уларҙың яуаптарын ишеттермәксебеҙ.**

**▶ Илен, ерен һаҡлау - ир-егеттең иң мөҡәддәс бурыстарының береһе. Бөгөн донъя кимәлендә генә түгел, хатта Рәсәй сиктәрендә лә ил-йорт именлегенә һәр төрлө хәүеф-хәтәр (локаль хәрби бәрелештәр, террор, ябай кешеләрҙең дә ҡорал ҡуллана башлауы һ.б.) янауы шарттарында әлеге изге бурысығыҙҙы атҡарыуҙы нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Хәлил Һөйөндөков:** Бер ҡасан да тип әйтерлек тыныс тормаған донъя хәҙер ҙә тынысһыҙланып ҡуя, үкенескә ҡаршы. Шуның өсөн дә ир-егеттең илен-ерен һаҡлау кеүек мөҡәддәс бурысын үтәүе хәҙерге ваҡытта ла актуаль мәсьәлә булып тора. Үҙебеҙ һис бер ваҡытта ла башҡаларға янағаныбыҙ юҡ, әлхәмдулиллаһ. Әммә әрмебеҙҙә һалдат һәм офицерҙарҙың хәрби әҙерлеген, тормош шарттарын ҡайғыртыу хәҙерге заман талаптарынан бер ваҡытта ла артта ҡалырға тейеш түгел. Хәрби әҙерлекте һәр саҡ юғары кимәлдә тотоу, уны артабан үҫтереү ниәтендә, һалдат һәм сержант составын мөмкин тиклем профессиональ төргә (ябай итеп әйткәндә, һалдаттарҙың ифрат та яҡшы эш хаҡы алып, контракт буйынса хеҙмәт итеү формаһына) күсереү мөһим. Әгәр хөкүмәт теге йәки был локаль конфликтты ҡоралды көстәр ҡатнашыуынан тыш хәл итә алмай икән, унда әле генә мәктәп партаһы артынан сыҡҡан йәш егеттәрҙе алып барып тығырға тейешле түгел, тигән фекерҙәмен. Ә бит ундай хәлдәр Афғанда ла, Чечен республикаһында ла булды!

**Ғайса Хәлитов:** Борон-борондан ир-егет өсөн ил һаҡсыһы төшөнсәһе батырлыҡ, намыҫ һәм ғорурлыҡ булып һаналған. Әле күптән түгел генә әрме сафтарында хеҙмәт иткән егеттәргә ҙур һоҡланыу менән ҡарай торғайнылар. Егеттәрҙе бөтә ауыл халҡы хөрмәт итеп ауыл ҡапҡаһынан сыҡҡансы изге теләктәр менән оҙатып ҡалыр ине. Изге бурысын намыҫ менән үтәп ҡайтҡан егеттәрҙе оло ҡунаҡ, батыр итеп ҡаршы алырҙар ине. Әммә бөгөн илдә барған үҙгәрештәр күп нәмәгә, шул уҡ ваҡытта патриотик тәрбиә, әрмелә хеҙмәт итеү кеүек төшөнсәләргә икенсе күҙлектән ҡарарға мәжбүр итә. Егеттәрҙең ил алдында үтәйәсәк изге бурысына булған мөнәсәбәте күп осраҡта ата-әсәләр ихтыярына бәйле булып сыға. Ҡайһы бер ата-әсә типһә тимер өҙөрҙәй уландарын төрлө сәбәптәр табып, төрлө ауырыуҙар уйлап сығарып, әрме сафынан алып ҡалыу өсөн йүгергеләй. "Мин ил алдындағы изге бурысымды үтәгәнмен - шул да еткән", тигән атайҙарҙың күбәйә барыуы аптырау ғына түгел, борсолоу ҙа тыуҙыра. Әлбиттә, атайҙарының был фекере менән килешмәй, әрмегә барырға үҙҙәре үк атлығып торған егетәр ҙә бар. Тимәк, ир-егеттәрҙә тыуған илде, тыуған ерҙе һаҡлау тигән илһөйәрлек тойғоһо бөтөнләй үк юҡҡа сығып бөтмәгән әле.

**▶ Ә шулай ҙа иле, ер-һыуы, ғаиләһе, яҡындары өсөн ҡалҡан булырҙай ир баланы нисегерәк тәрбиәләргә һуң? Ни өсөн бөгөн беҙҙә ир бала тәрбиәләү күбеһенсә ҡатын-ҡыҙ ҡулына ҡарап тора?**

**Хәлил Һөйөндөков:** Илһөйәр ир бала тәрбиәләү, минеңсә, бала саҡтан, ғаиләнән башланырға тейеш. Бөгөн күп кенә ҡатын-ҡыҙ ир балаларын ғына түгел, ә ирҙәрен дә тәрбиәләү "хоҡуғын" үҙ өҫтөнә алып, хатта уны "шулай булырға тейеш" тип уйлай. Һәм улар ана шулай аңлы рәүештә иренән ғаилә дилбегәһен тартып алып, шуның менән ифрат та ҡәнәғәт булып йәшәй. Шуға күрәләр ҙә, ҡайһы бер малайҙар "бисә" фиғелле булып үҫә. Ундайҙар әрмегә килгәс тә ебеп төшә. Малайҙы күберәк атай кеше тәрбиәләргә тейеш. Әммә был хәлгә ҡатын-ҡыҙ ғына ғәйепле, тип уйларға ярамай. Беҙ, ир-ат, үҙебеҙ ҙә, әллә ялҡаулыҡтан, әллә башҡа сәбәптән, дилбегәне һис бер ҡаршылыҡһыҙ ҡатын-ҡыҙға тапшырабыҙ ҙа ҡуябыҙ.

Ә ил һаҡлау мәсьәләһенә килгәндә, элек беҙҙе атай-әсәйҙәр "Насар уҡыһаң, тәртипһеҙ булһаң, армияға алмайҙар", тип ҡурҡыта ине. Минең дә иң ҡурҡҡаным шул булғандыр әле. Өйҙә, мәктәптә, матбуғат сараларында ил һаҡсыһын, һалдатты иң идеаль кеше итеп һүрәтләйҙәр ине. Шуға күрә, был юҫыҡта тәрбиә һәр ерҙә булырға тейеш. Минеңсә, малайҙарға патриотик тәрбиә биреүҙә мәктәптәр айырыуса ҙур роль уйнай. Тарих, әҙәбиәт дәрестәрендә уҡытыусылар балаларҙы тыуған илде һөйөү, уны күҙ ҡараһындай күреп һаҡларға әҙер булыу рухында тәрбиәләүгә төп баҫым яһарға тейеш. Шулай уҡ малайҙарҙың күңелендә үҙ иленең һаҡсыларына - һалдаттарға һәм офицерҙарға ҡарата ихтирам, үҫкәс улар һымаҡ булыу теләген уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк. "Йәгеҙ әле, егеттәр!" һымағыраҡ һәр төрлө кисәләр, викториналар ойоштороу, хәрби хеҙмәттә булып ҡайтҡан егеттәр, хәрбиҙәр менән осрашыуҙар малай кешеләрҙә - буласаҡ ил һаҡсыларында яҡындары, иле өсөн ысынлап та ҡалҡан булырҙай хистәр уятыусан. Ошо юҫыҡта, минең уйымса, Сибай мәктәптәрендә һәм улар менән тығыҙ бәйләнештә булған китапханаларҙа эштәр яйға һалынған. Ошо арала, Ватанды һаҡлаусылар көнө айҡанлы, Рәйсә Ҡунаева етәкләгән тыуған яҡты өйрәнеү китапханаһында мине, отставкалағы хәрби кеше булараҡ, уҡыусылыр менән осрашыуға саҡырҙылар. 13-сө һанлы башҡорт лицейы һәм 10-сы мәктәп уҡыусыларынан торған зал шығырым тулы булды. Уҡыусылар араһында әрме тормошо хаҡында ҡыҙыҡһыныусылар байтаҡ ҡына ине. Малайҙар хәрби хеҙмәткә ҡағылышлы һәр төрлө һорауҙарға яуап биреп, анкета тултырҙылар. Ошондай яҡшы итеп ойошторолған һәр бер сара малайҙарҙың күңелендә, әлбиттә, эҙһеҙ ҡалмаясаҡ.



**Ғайса Хәлитов:** Һуңғы йылдарҙа бала тәрбиәләү күбеһенсә ҡатын-ҡыҙ ҡулына күсеп бара шул. Бының сәбәбе бер нисәү. Беренсенән, эшһеҙлек арҡаһында күп ир-ат матди яҡтан ғаиләһен аҫырарлыҡ эш эҙләп, сит тарафтарға сығып китә, балаларын атай наҙынан, атай тәрбиәһенән мәхрүм итә. Ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеүҙе генә беренсе урынға ҡуйып, бала тәрбиәләү бурысынан бөтөнләй ситләшеүсе атайҙар һаны арттҡандан-арта бара, һәм был бик ҡыҙғаныс хәл. Икенсенән, ғаиләләр тарҡалыуы баланы тағы ла әсәй ҡулына ҡалдырып, атай тәрбиәһенән мәхрүм итә. Өсөнсөнән, ирһеҙ бала табып, баланы яңғыҙы тәрбиәләүгә өҫтөнлөк биргән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа байтаҡ. Дүртенсенән, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә ир-егет уҡытыусылар, тәрбиәселәр ғәҙәттән тыш хәл кеүек ҡабул ителә башланы бит. Бына шулай, бала тәрбиәләү менән бөгөн нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнә. Шулай булғас, ҡатын-ҡыҙ фиғелле ир-егеттәр артыуына аптырарға ярамай. Был хәҡиҡәтте ир балаһының киләсәге, яҙмышы өсөн ысынлап борсолған әсәй ҙә, атай ҙа ҡабул итергә һәм хәлде нисектер йомшартырға, төҙәтергә тырышырға тейештер. Һис юғы, ғаиләһендә атай тәрбиәһе күрмәгән ир балалар төрлө спорт секцияларына йөрөһөн ине.

**▶ Ирлек намыҫы, ир абруйы тигән төшөнсәләр һеҙҙең үҙегеҙ өсөн нимәне аңлата? Тап ошо сифаттар ярылып ятҡан кеше ғәмәлдәре һәм тормош күренештәренән ниндәй миҫалдар килтерә алаһығыҙ? Йәғни ниндәй осраҡтарҙа бына ошо сифаттар тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин?**

**Хәлил Һөйөндөков:** Ғаиләһендә булһынмы, йәмғиәттәме, ир кеше үҙенең төп тәғәйенләнешен аҡлап, үҙен был донъяға яралтҡан Аллаһы Тәғәләнең уға йөкмәткән бурысын үтәп йәшәргә бурыслы. Аллаһ уны физик яҡтан көслөрәк итеп бар ҡылған, ниндәйҙер өҫтөнлөктәр биргән бит. Өҫтөнлөк, тигәндә, әлбиттә, ир-егеттәрҙе ҡатын-ҡыҙ затына ҡарағанда юғары ҡуйырға тырышыу күҙ уңында тотолмай. Йылҡы малы менән һыйыр малының ҡайһыныһы

***Эшһеҙлек арҡаһында күп ир-ат матди яҡтан ғаиләһен аҫырарлыҡ эш эҙләп, сит тарафтарға сығып китә, балаларын атай наҙынан, атай тәрбиәһенән мәхрүм итә. Ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеүҙе генә беренсе урынға ҡуйып, бала тәрбиәләү бурысынан бөтөнләй ситләшеүсе атайҙар һаны арттҡандан-арта бара, һәм был бик ҡыҙғаныс хәл. Икенсенән, ғаиләләр тарҡалыуы баланы тағы ла әсәй ҡулына ҡалдырып, атай тәрбиәһенән мәхрүм итә. Өсөнсөнән, ирһеҙ бала табып, баланы яңғыҙы тәрбиәләүгә өҫтөнлөк биргән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа байтаҡ. Дүртенсенән, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә ир-егет уҡытыусылар, тәрбиәселәр ғәҙәттән тыш хәл кеүек ҡабул ителә башланы бит. Бына шулай, бала тәрбиәләү менән бөгөн нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнә. Шулай булғас, ҡатын-ҡыҙ фиғелле ир-егеттәр артыуына аптырарға ярамай.***

*✓ Башҡорттар иң нескә, икәү-ара ғына булған мөнәсәбәттәрен ҡысҡырып әйтмәгән һәм халыҡҡа сығармаған. Улар был мөнәсәбәтте ҡарашы, тауыш наҙы, йөҙөндәге балҡыш, күҙендәге осҡон, йылы нур аша сағылдырған.*

яҡшыраҡ, тигән һорау ифрат та мәғәнәһеҙ булған һымаҡ, ир затының да, ҡатын-ҡыҙҙың да үҙ урыны, үҙ тәғәйенләнеше бар тормошта. Бына шул тәғәйенләнештәге ролендә нисек атҡарыуға ҡарап, ир намыҫы тураһында фекер йөрөтөргә була инде.

Ир намыҫлы ир-ат хаҡында һанһыҙ миҫалдар килтерә алам тормошомдан. Ҡатын-ҡыҙға, балаларына ҡарата яҡшы мөғәмәләлә булған, уларҙы аңлаған, өйҙә лә, эштә лә үҙен ысын ир-егет итеп ҡуйып, һәр тарафта абруй яулағандарҙы "ир намыҫлы" тип әйтеп була, минеңсә. Ундай булыу өсөн ниндәйҙер бер ҙур батырлыҡ ҡылыу мотлаҡ түгелдер. Батырҙарыбыҙ - улар инде ирлектең иң юғары нөктәһендә, тип аңларға кәрәк. Ә балаларын туйындырып, кейендереп, тәрбиәләп, иртәнән кискә ҡәҙәре эштә бил бөккән ҡатынына ғына ҡарап, өйҙә ятҡан ирҙәрҙә, әлбиттә, "ир намыҫы" булыуы шикләндерә.

Әрмелә хеҙмәт иткән осорҙа ҡайһы бер командирҙарҙың хәрби хеҙмәттәге гүзәл заттарыбыҙға ҡарата булған мөнәсәбәтен ошоғаса аңлап етмәйем һәм бер ҡасан да аңламаясаҡмын. "Такие же деньги получают, пусть пашут", тип, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ир-егеттәр менән бер рәттән строевой плац буйлатып "ҡыуып", противогаз кейҙереп, километрҙарға йүгерергә мәжбүр итеүҙәрен, уларға ифрат та тупаҫ мөғәмәләһен "ирлек"кә һанамайым. Заманында шуның өсөн хатта командование менән һүҙгә килешкән ваҡыттар булғыланы. Сөнки мин һәр саҡ "фәҡәт ир-ат ҡына погон тағып, итек кейеп, мылтыҡ аҫып йөрөргә тейеш", тигән уйҙамын. Әммә ҡыҙҙарҙы хәрби хеҙмәткә алғандар икән, уларға ҡараш та иң яҡшынан булырға тейеш.

**Ғайса Хәлитов:** "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын", кеүегерәк мәҡәлдәр быуаттар буйы һыналғандан һуң ғына тормошта үҙ баһаһын алып, беҙҙең көндәргә лә хас булған тапҡыр һүҙҙәр булып ҡалғандыр. Ир намыҫы һәм абруйы ғаиләлә бала саҡтан һалынырға тейеш, ә бының өсөн әсәйҙәрҙән дә аҡыл, тырышлыҡ, сабырлыҡ талап ителә торғандыр. Бала бит иң тәүҙә ғаилә ағзаларының күркәм мөнәсәбәттәрен күреп, ата-әсәһенең матур өлгөһөндә тәрбиәләнә. Ғаилә тигән бәләкәй генә дәүләттә йәшәгән ҡанундар, йолалар, мөнәсәбәттәр балаға йөрәк йылыһы менән һуғарылған тәрбиә булып күсеп, уның быуынында дауам итәсәк. Эйе, үҙ-ара мөнәсәбәттәр, береңә береңдең нисек өндәшеүе - барыһы ла мөһим. Ғаиләләрҙә күп осраҡта ҡатын-ҡыҙҙың балалары эргәһендә ирен хурлауына, уны йүнһеҙлектә йә башҡа гонаһтарҙа ғәйепләүенә шаһит булаһың. Бындай мөнәсәбәт, әлбиттә, ир-атҡа хөрмәт өҫтәмәй, бала тәрбиәһенә лә зыян итеп ҡуя. Бындай миҫалдар, үкенескә күрә, беҙҙең халыҡта йыш осрап тора шул.

**▶ "Ир өйҙән сыҡһа - бәрәкәт, ҡатын өйҙә торһа - бәрәкәт" тигән халыҡ әйтемен нисек аңлатаһығыҙ? Бөгөнгө көнөбөҙгә ярашлымы ул, ҡайһы саҡта ике заттың урындары алышынғандай тойолоп китмәйме?**

**Ғайса Хәлитов:** Эйе, бөгөн был мәҡәлдә әйтелгәнсә булмай китте шул. Ир-атты көслө зат тиһәләр ҙә, хәҙерге баҙар шарттарын күптәр ауырыраҡ кисерҙе, ә ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең тәбиғәттән бирелгән сыҙамлығы, тормошто дауам итеүсе булараҡ ныҡышмалылығы менән үҙгәрештәргә тиҙерәк ҡулайлашты. Күп осраҡтарҙа мал табыу, ғаиләләге күп мәшәҡәттәрҙе хәл итеү "көсһөҙ" ҡатын-ҡыҙ иңенә төшә. Бындай күренештәр ауыл ерендә бигерәк тә нык күҙгә ташлана. Әммә, иң мөһиме, үҙ хатаңды таныу, етешһеҙлектәрҙе күрә белеү, үҙеңә тәнҡит күҙлеге аша бағыу, тиҙәр бит. Ошо кимәлгә килеп еттек, хәҙер хаталарҙы төҙәтә башларға саҡырайыҡ ир-егеттәрҙе...

**Хәлил Һөйөндөков:** Халҡыбыҙ шундай алтын фекерҙәргә, мәҡәлдәргә ифрат та бай. Ир өйҙән сыҡһа - бәрәкәт... Әлбиттә, борон-борондан ир кеше аяҡ һоноп өйҙә ултырмаған, ғаиләһенә аҙыҡты фәҡәт ул табырға тейеш булған. Хәҙер ҙә тап ана шулай булыу мотлаҡ, тигән фекерҙәмен. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә бының киреһе күҙәтелеүе, әлбиттә, үкенесле. Атайҙың көндөҙ эштә булып, кискә генә арып ҡайтыуы - улы өсөн үҙе үк тәрбиәүи сара булып тора. Ир кеше тап ана шулай булырға тейеш, тип ҡанына һеңеп үҫергә тейеш ир баланың. "Атайығыҙ эштән ҡайтыуға берәй тәмле нәмә бешерә һалайыҡ", тип, әсә кешенең ҡыҙына өндәшеүе - шулай уҡ ҡыҙ балала ир-атҡа ҡарата яҡшы мөнәсәбәт тәрбиәләү өлгөһө. Бала сағымды хәтерләйем. Әсәйем мәрхүмә хатта әҙ генә ваҡытҡа йомош менән өйҙән сығып китһә лә, өйҙөң йәме бөткәндәй, хатта һалҡын һымаҡ тойола башлай торғайны. Тимәк, ҡатын-ҡыҙ өйҙә торһа - бәрәкәт, тигәне шул була. Ә атайым, ысынлап та, һәр саҡ эштә, йә иһә ихатала ниҙер эшләп йөрөгән булып хәтеремдә ҡалған. Тап ана шулай, һәр ир кеше ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеп, ҡатын-ҡыҙ өйҙә торһа ла һуң...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәбиғәт беҙҙе шулай яратҡан: ир-егет - ҡатын-ҡыҙһыҙ, ҡатын-ҡыҙ - ир-егетһеҙ йәшәй алмай, йәғни улар бер-береһенән башҡа Хоҙай Тәғәлә ҡушҡанды -тоҡомон дауам итеү тигән иң оло бурысты тормошҡа ашыра алмай. Ләкин был бурысты үтәү юлында мең төрлө ҡаршылыҡтар, сәбәптәр етерлек. Тик ҡаршылығы булғас, уны хәл итеү юлдары ла барлығын иҫкәртә Хоҙай. Тимәк... Байрам көнөндә ошо юлдарҙы уҡығандарға ир-егет бурысын, тәғәйенләнешен үтәргә тырышып, илгә лә, ғаиләһенә лә ҡалҡан булып, ирлек намыҫын һаҡлап йәшәүҙәрен теләйбеҙ.**

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ЫСЫН МӘҘӘНИЛЕКТЕ...

## кем нисек аңлай?

**Быйылғы йыл Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителде. Мәҙәниәтте мәҙәниле әһелдәр булдыра. Тимәк: "Ниндәй була ул мәҙәниле кеше?" - тигән һорау тураһында уйланыу, фекер алышыу, бәхәс ҡороу урынлы булыр быйылғы йылда, тип уйлайым. Тынғы бирмәгән ҡайһы бер һорауҙарымды гәзит уҡыусыларға ла төбәмәксе булдым.**

**Башҡорт теле ауыл теле генәме?** Өфөлә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының "Йыл уҡытыусыһы" тигән конкурсы булып үткәс, райондан килгән бер уҡытыусы менән осраҡлы ғына табындаш булырға тура килде. Ярыш һөҙөмтәләре, мәктәп хәлдәре тураһында һөйләшеп ултырған мәлдә кәрәҙле телефондан ҡыҙы шылтыратты һәм конкурста ҡатнашыусы алдынғы уҡытыусы ҡыҙы менән рус телендә һөйләшә башланы. Улар һөйләшеп бөткәс, аптырауымдың сиге булмаған мин:

- Үҙең башҡорт теле уҡытыусыһы була тороп, балаң менән русса һөйләшәһеңме? - тип һораным.

- Ә ни эшләп? - тип аптырап ҡараны ул да. - Ауыл түгел дә инде был - Өфө! Ҡала ерендә башҡортса һөйләшергә ояла ул ҡыҙым. Әле банкта эшләй. Аралашыу тик рус телендә генә, ти.

- Мин банк тураһында әйтмәйем. Хатта башҡорт теле уҡытыусыһының да үҙ балаһы менән рус телендә һөйләшеүе аптыратты. Ә уҡыусыларыңа нимә тип өйрәтәһең - имтихан биргәс тә рус теленә күсегеҙ, башҡорт теле ауылда ғына кәрәк типме?..

Һөйләшеү ошо урында тамамланды. Был уҡытыусы минең әйткәндәремдән һуң үҙгәреп китер тип уйламайым, әлбиттә, әммә ошондай осраҡтарҙа битараф ҡалыу ҙа ярамай бит.

**Башҡорт теле сәхнә теле генәме?** Әле күптән түгел генә Башҡортостан юлдаш каналына тапшырыуҙа ҡатнашырға барҙым. Коридорҙа "Һылыуҡай" конкурсында ҡатнашыусы ҡыҙҙарға тап булдым. Ҡыҙҙар матурҙар, һомғол кәүҙәлеләр. Һоҡланып ҡарап торҙом. Тапшырыу башланыуын көткәндә ҡыҙҙарҙың геү килеп конкурсҡа әҙерләнеүен күҙәтеп ултырҙым. Ошо ваҡыт эсендә, исмаһам, береһе башҡортса һөйләшһәсе! Аралашыу тик рус телендә генә барҙы. Әлбиттә, мин тағы шып-шым ҡала алманым:

- Әгәр баһалама ағзаһы булһам, сәхнәләге түгел, сәхнә артындағы аралашыуығыҙ өсөн минус ҡуйыр инем. Ошонда, һеҙҙең урында әрмән йәки сиған ҡыҙҙары булһа, үҙ-ара ниндәй телдә һөйләшерҙәр ине икән? Рәхәтләнеп үҙ телдәрендә аралашырҙар ине. Башҡорт теле һеҙҙең өсөн конкурс теле генәме ни? Үҙ-ара аралашыу теле түгелме ни? -тинем.

- Бына мин, мәҫәлән, француз телен дә, рус телен дә, кәрәк икән, ҡытай телен дә, башҡорт телен дә беләм, - тип, барыһы өсөн дә яуап биреүҙе үҙ өҫтөнә алды һылыуҙарҙың береһе.

- Ә ни эшләп улай булғас башҡортса һөйләшмәйһең? - тигән һорауым да һауала эленеп ҡалды. Ҡыҙҙар мине ишетмәмешкә һалышты...

**Үҙ-ара сит телдә аралашыу, туған телеңде һанға һуҡмау мәҙәнилекме?** "Йәшлек" гәзите Ғашиҡтар көнө уңайы менән "Һөйгәнеңә кем тип өндәшәһең?" тигән конкурс иғлан итте. Нимә тип кенә яҙмайҙар ине йәштәр башҡорт Википедияһында! Һөйләшеүгә мин дә ҡатнашып киттем:

- Хөрмәтле йәштәр! "Йәшлек" хеҙмәткәрҙәре! Бик матур конкурстыр был, бәлки. Әммә барыбер башҡорт булмышына тап килмәй. Башҡорттар иң нескә, икәү-ара ғына булған мөнәсәбәттәрен ҡысҡырып әйтмәгән һәм халыҡҡа сығармаған. Улар был мөнәсәбәтте ҡарашы, тауыш наҙы, йөҙөндәге балҡыш, күҙендәге осҡон, йылы нур аша сағылдырған. Күңелеңдә булмаһа, йөҙөңдә балҡыш алмай бит. Хисле халыҡ бит ул башҡорт! Ә хис тел аша түгел, күңел аша сағылыусан. Ә күптәр быны аңламай, беҙҙең башҡорт матур һүҙгә һаран, тип уйлай. Иреңдең йәки ҡатыныңдың ҡарашынан күңелен аңлай белмәйһең икән - тимәк, һин уны бөтөнләй аңламайһың. Хис-наҙҙы башҡорттар фәҡәт һөйгәненең исемен наҙлап әйтеү аша сағылдырған. "Исемеңде һалдым йырҙарға" йәки, Рәмисә әйтһәк, "...исемең йөрәгемдә ҡалыр мең булып", "исемеңде йырға ҡушып, иркәләр-наҙлар инем..." Шуғалыр ҙа, башҡорт халҡында ҡатын-ҡыҙ исеменә арналған йырҙар ғәжәп күп: "Зөлхизә", "Сәлимә", "Зөлхәбирә", "Зәлифә", "Гөлғәйшә", "Наза" "Зөбәйҙә", "Сәхипъямал", "Ғәйниямал" һәм башҡалар. Тимәк, яратыу-һөйөү хисе фәҡәт исемгә бәйле әйтеләлер. Күк есеме, металл, ҡош-ҡорт йәки башҡа төрлө йән эйәһенең атамаһы менән өндәшеү һөйгәнеңдең исемен оҡшатмауҙан килеп сыҡмаймы икән? - тигән фекер яҙҙым. Бер һылыуҡай былай тип яҙып ебәргән:

- Мәрйәм апай, беҙ бит элекке заманда йәшәмәйбеҙ. Йәштәр улай күҙ менән генә аралашмай. Башҡорт булмышы гел шул бер ҡараш менән генә ҡалмай инде. Килешмәйем мин ул фекер менән. Рустар ауыҙ тултырып "дорогая, милая, нежная, рыбка, мой герой, любимый" тип ултырғанда, теле юҡ һымаҡ, башҡорт ҡарашы менән генә аңлашһынмы?

Башҡа милләттәрҙән байтаҡ йола-ғәҙәттәрҙе отоп алып, үҙ мөхитебеҙгә индерә башланыҡ. Икмәк-тоҙ менән ҡунаҡ ҡаршылайбыҙ - аяғөҫтө, йыуылмаған ҡул менән икмәк ашау халҡыбыҙҙа борон-борондан әҙәпһеҙлек һаналған; туйҙарға супылдашып үбешеү ғәҙәте инеп китте - башҡорт йәштәре өлкәндәр янында бер ваҡытта ла улай ҡыланмаған, хатта бит башҡорт килендәренең ҡайныларынан да тартынмай, эске кейем менән генә ҡояшта ҡыҙынған осраҡтары ла бар хәҙер... Шулай итеп, сит милләттәр ҡылығын үҙебеҙгә индерә башлаһаҡ, мәҙәнилек булырмы был? Беҙ үҙ йөҙөбөҙҙө юғалтмабыҙмы?

**Үҙеңдең бынамын тигән тәрбиә ҡанундарын, йолаларын онотоп, сит-ят ғәҙәттәрҙе үҙләштереү мәҙәнилекме?** Быйыл да, йылдағыса, "Башҡорт мәҙәниәте. Тормош һабаҡтары"нан олимпиада булып үтте. Билеттағы: "Халҡыбыҙҙың иң күренекле сәнғәт әһелдәренән биш исемде ата һәм улар тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бир", - тигән һорауға бер уҡыусы "Һәҙиә Дәүләтшина" тип яҙған. "Кем ул Һәҙиә Дәүләтшина?" тип һорайым "Йырсы", ти был. Ә бит башҡорт әҙәбиәтенән был яҡты исем баланың күңеленә бәләкәйҙән яҙылырға тейеш. Һәр баланың, һәр башҡорттоң мәҙәни кимәлен тәрбиәләү, үҫтереү маҡсаты ҡуйылған был предмет алдында. Башҡорт мәҙәниәтенән үткәрелгән олимпиада уҡытыу кимәлен генә түгел, мәҙәнилек кимәлен сағылдыра торған сара.

Радио-телевидение тапшырыуҙарында ҡатнашҡан әһелдәребеҙҙең береһе генә лә тип әйтерлек кинәндереп башҡортса һөйләшмәй. Хатта тел белгестәре лә. Саҡ ҡына ҡатмарлыраҡ һорау килеп сыҡһа, "Русса әйткәндә", тип, рус телендә яуап биреп ҡуялар. Ни өсөн? Үҙ фекереңде туған телеңдә аңлата алмау ниҙән килеп сыға ул? Туған телеңдә ярым-йорто ғына һөйләшә белеү мәҙәнилекме?

Телеңде, йолаларыңды, тарихыңды онотоу, сит-ят исемдәр ҡушыу, икәү-ара ла, балаң менән дә ят телдә аралашыу, мөхәббәт, тип, ете-ят милләт вәкиле менән ғаилә ҡороу, һөҙөмтәлә бер милләттең дә йолаһын, әҙәп ҡағиҙәләрен тотмау мәҙәнилекме?

Әйҙәгеҙ, асыҡтан-асыҡ фекер, бәхәс ҡорор мөмкинлеге булған "Киске Өфө" гәзите аша ысын мәҙәнилек тураһында һөйләшәйек, туғандар. Уртаҡ фекергә киләйек. Заманса йәшәргә лә кәрәк, башҡа милләттәрҙән ҡалышмаҫҡа ла тейешбеҙ. Әммә шул уҡ ваҡытта үтә самаһыҙлыҡ арҡаһында милли йөҙөбөҙҙө юғалтыу, милләт булараҡ та юғалыуға табан йөҙ бороу булмаҫмы?

**Минеңсә, ысын мәҙәнилек - туған телендә теле асылып, уның ҡәҙерен белеп, бар байлығына эйә булып, туған телдә уйлап, фекер йөрөтөп, ижад итеп һәм милләттәштәрең менән фәҡәт туған телеңдә аралашып, үҙ халҡыныңдың мәҙәниәтен, тарихын яҡшы белеп һәм халҡың менән ғорурланып, халҡыңдың йыр-моңон күңеленә һеңдереп, тыуған ерендә, илендә ғәзиз әсәйеңдәй күреп, халҡыңдың рухы, маҡсаты, уй-хыялдары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәүҙер. Һеҙҙеңсә нисек?**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

✓ *Тертелдәк кенә яратҡан өләсәһен күреп өлгөрмәне. Үҙенең нисек итеп ыржайҙарҙың ауыҙынан ҡотола алыуының сәбәбен дә аңламаны. Өләсәһенең ғүмер эстафетаһын ошо рәүешле итеп ейәнсәренә тапшырғанын да белмәне.*





# ЭСТАФЕТА

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**

*(Хикәйә)*

Тимертырнаҡ менән Һортой игеҙәк көсөктәре Һәүерек менән Йүгеректе тәүге тапҡыр ғына ауға алып сыҡмай. Улар йәше тулыр-тулмаҫтан ошо юлда. Һәр бер ау, һәр бер һунар көсөктәр өсөн айырым бер һабаҡ, дәрес. Атай менән әсәй улдары Йүгеректең уңыштары өсөн ҡыуанһа ла, Һәүеректең мәнһеҙлеге өсөн уларҙың аҙау тештәре һыҙлай. Хәйер, уның ана шулай, йолҡош аттар кеүек, Һәүерек исем-ҡушаматы алыуы ла башҡа ыржайҙарға оҡшамаған сифатынан - ығышлығынан килә. Ҡорсаңғы. Бына был һунарҙа ата менән әсә Һәүеректе ныҡлап һынап ҡарамаҡсы. Һынауҙы ул үтә алырмы-юҡмы? Үтә алмаһа...

Ҡоралайҙарҙы ҡыуа төшкәндә барыһы ла көйлө һымаҡ ине. Әммә башта уҡ тәғәйенләп ҡуйған ҡорбандары көтмәгәндә икенсе бер ҡыр кәзәһе менән алмашыныр тип кем уйлаһын инде? Быны ыржайҙар яҡшыға юрамай, бик ауыр кисерә. Һәр хәлдә, башта уҡ билдәләнгән ҡорбандан диҡҡәтте икенсегә күсереү еңел түгел. Иң арттан эйәргән Тырт-Мырттың илерткес итләс һынына ҡарап, уның боғаҙын аҡтарғандан һуң тәмләп эсер ҡанының ҡайнарлығын тел осонда тойоп-татып та өлгөргәйне Тимертырнаҡ. Инде шул ниәтен бойомға ашырыу ғына ҡалғайны. Әммә уйламағанда-көтмәгәндә, Тырт-Мырттың ҡаршыһында ғына тап шундай уҡ икенсе бер кәзә һауаға атылды ла, мөғжизәнең мөғжизәһе булды: бер миҙгелгә һауала аҫылып тороусы ҡоралай туптура Тимертырнаҡтың күҙҙәренә тултырып ҡараны. Барыһын да аңланы ошо ҡараштан күпте күргән, күпте кисергән ыржайҙар өйөрө башлығы. Тертелдәп кенә торған икенсе шундай уҡ йән, моғайын, игеҙәгелер әле, уның ҡорбанын нисек боғаҙынан алыуы, ҡайнар ҡанына ләззәтләнеүенә бәйле ниәттәрен белеп ҡалғандай, үҙенең дәғүәһен һауаға аҫылынып тороп белдерә. Йолҡош! Быны аңлауҙан өйөр башлығының эсендәге икенсе сифаттағы бүреләр тағы ла ажарыраҡ итеп олорға тотондо. Асығыу менән асыу бергә ҡушылғанда ғына сыға бындай олоу. Ана ниндәй дәғүә белдерә уға тертелдәк кенә мәхлүк йән! Ә бит тап шуның өсөн дә Тертелдәк үҙенең ҡандаш игеҙәген, башҡа тоҡомдаштарын ҡотҡарыр өсөн ыржайҙар өйөрөн үҙенең артынан эйәртеп, бөтөнләй икенсе яҡҡа борҙо. Өҫтөнлөктө үҙенең яғына ауҙарҙы. Һәр хәлдә, ыржайҙар башлығы Тертелдәктең өйөрҙән ҡайырылыуын шулай баһалап өлгөрҙө.

Тимертырнаҡ өйөрҙән ҡайырылған Тертелдәк артынан ыржайҙарҙы алып китте. Тырт-Мырттың һыны һаман да өйөр башының күҙ алдынан китмәй торҙо. Ҡаныҡыуы шул тиклем булғандыр. Тертелдәк менән Тырт-Мырт һуйған да ҡаплағандай оҡшаштар. Ошо ла булышлыҡ итә, күрәһең. Ауыҙына ҡапҡан ҡалъяны йолҡа тартып алдылармы ни! Был кисереш Тимертырнаҡты оторо ярһытты ғына. Ул ҡаршыһына осраған тәрән ҡар ҡорғандарын ҡатҡыл күкрәге менән ярып, тағы ла шәберәк алға бара башланы. Асыуына ҡаратырышлығы ла килеп ҡушылды. Диңгеҙ ярына һуҡҡан көслө тулҡындар, цунами менән көрәшеүгә тиң ине ыржайҙарҙың ошолай хәрәкәт итеүе. Ошо тулҡындар ғына булмаһа, улар әллә ҡасан уҡ атылған уҡтай барып етеп, үҙһүҙле ҡыр кәзәһен ҡармап та алған булырҙар ине. Исемен дә һорап тормаҫтар, ҡабып та ҡуйырҙар ине. Өйөргә тигеҙ итеп бүлгәндә бер ҡабымлыҡ ҡына ит киҫәге, ә үҙе ниндәй ыржайҙар менән етәкселек итеп маташа. Тьфү! Әммә ошо рәүешле Тертелдәккә нәфрәтләнеп, ни тиклем нығыраҡ ынтылып, шундайын көсөргәнеш һалыуҙан да ни фәтеүә? Бындай көсөргәнеш уларҙы тәрән көрт аҫтына тағы ла нығыраҡ батыра ла, киреһенсә, Тертелдәк менән уларҙың араһы торған һайын алыҫлаша ғына төшә. Көсөргәнеш көрт аҫтына тарта. Ихтыярһыҙлыҡ булған урында уҫаллыҡ алға сыға. Тап шуның һымаҡ. Уҫаллыҡ иһә, ҡанды ҡайната, аңды томалай һәм хәлде тиҙ ала. Уҫаллыҡ был осраҡта аяҡҡа тышау, ҡамасау ғына. Ыржайҙар иһә, башҡа төрлө була ла алмай. Был саҡта хатта ҡайнар ҡан эсеү, татлы ит ашап кинәнеү ниәте лә бойомға ашмаҫ хыял булып күренә башлай. Ыржай һынлы ыржай өсөн аҙау тешкә килеп эләккән табышты ауыҙҙан ысҡындырыуҙан да ҙурыраҡ күңел ҡайтыуы юҡ һымаҡ. Етмәһә, улар аҙна-ун көн йүнле ризыҡ ҡапҡаны юҡ.

Әммә... Ашарға, нисек булһа ла тамаҡ туйҙырырға ынтылыу хисе хатта һәр ҡаршылыҡты тупаҫ көс менән емереп, аҙау теш менән ҡайырып өйрәнгән ыржайҙарҙы ла хәйләгә барырға мәжбүр итә икән. Ваҡытлыса төлкө булып торорға ла тура килә ыржайҙарға. Төлкөләрҙе хәйләкәр булғаны өсөн күрәлмай ыржайҙар. Әммә уларҙың хәйләкәрлеге бына ошондай саҡта иҫтәренә төшә. Төлкөлөккә күҙ ҙә йомола. Кем белә лә, кем күрә төлкө халәтендәге ыржайҙарҙы. Маҡсат ысулды аҡлай, тиҙәр. Ҡоралайҙарҙы нисек итеп баҫтырып тотоу мөһим түгел, тамаҡ туйҙырыу мөһимерәк. Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә. Күпте күргән, күпте кисергән өйөр башлығы хәҙер инде бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлай: ғәҙел йүгереп ярышыу һәм ҡасыу-баҫтырыу бәйгеһендә улар ҡоралайҙарҙан күпкә ҡалыша. Ыржайҙарҙың өс-дүрт һикергән араны бер һикереүҙә үтеүсе илектәрҙең артынан туп-тураға доҡойоу - бер ҡатлылыҡҡа тиң ахмаҡлыҡ. Шуның өсөн дә иң дөрөҫ юл ҡасыусының булмышына ҡурҡыу һалып, ҡотон алыу. Бының өсөн ҡоралай албырғап ҡалырға һәм дөрөҫ булмаған хәрәкәттәр яһарға, сәбәләнергә тейеш. Ошо ниәт тормошҡа ашһа, ҡорбан ҡайһы яҡҡа ҡасырға белмәйенсә, икеләнеү ҡулсаһында ҡаласаҡ та, үҙенән-үҙе ыржайҙарҙың ауыҙына килеп ауасаҡ.

Ғәҙәттән тыш фиҙаҡәрлек, саманан артыҡ көсөргәнеш һалмаһаң, ит ҡаба алмаҫһың, тигән хәҡиҡәтте лә яҡшы аңлай Тимертырнаҡ. Бына хәҙер ул ана шундай көсөргәнеште һалырға, килеп тыуған хәлде үҙгәртергә тейеш. Ул үҙҙәренән алыҫая барыусы Тертелдәктең сираттағы үҙәккә инеп юғалғанын көтөп кенә барҙы ла, башҡаларға юлды дауам итергә бойороп, үҙе йәһәт кенә ултыртылған ҡарағайлыҡҡа боролоп инде. Ағаслыҡтың ситенә ел һырынты өйгән, ә инде эске яҡта ҡарағай ылыҫтары ышығында ҡарҙың тәрәнлеге ыржайҙың тубығы тиклем дә булмаҫ. Әгәр ҙә ниәте бойомға ашһа, ул ошо ҡарағайҙар араһынан сабып барып, ҡоралайҙың ҡаршыһына барып сығып өлгөрөргә тейеш. Әгәр ҙә ул ошоно эшләмәһә, Тертелдәк бер аҙҙан үргә табан артылып, уларҙан бөтөнләйгә эҙ яҙҙырасаҡ.

Көсөргәнеш һалынды. Тимертырнаҡтың артынан ҡар саңы ғына борҡоно. Ҡарағайҙарҙың ҡар йәбешеүҙән ергә табан һәлмәкләнеп аҫылынған ботаҡтарына ара-тирә уның һырты ҡағылыуҙан тигеҙ рәт булып теҙелгән ағастар араһында ҡар яуып үткәндәй тойолдо. Тимертырнаҡ елдәй елеп, ҡарағайлыҡтың осона тиклем сабып барып та етте. Урманлыҡ бөткән урында артабан тау үре башлана. Әгәр ҙә Тертелдәк үргә артыла башлаған булһа, артабан уны эҙәрлекләү - мәғәнәһеҙлек. Тимертырнаҡ үр башланған тарафҡа табан ике тапҡыр ынтылып ырғыны ла, өсөнсөгә үрәпсегәнендә бынан бер минут самаһы элек илекте һуңғы тапҡыр күҙҙән юғалтҡан үҙәккә күҙ ташлап та өлгөрҙө. Йәненә йүгереп йылы инеп китте Тимертырнаҡтың. Ыржайҙар ҙа шатлана белә микән? Ҡоралай, бер ни булмағандай, ул баҫып торған үр башланған тарафҡа менеп килә. Унан күпкә артта ҡалышып ыржайҙар ҡар ярып ығыша.

Хәҙер инде Тимертырнаҡҡа тап ошо ерҙә ҡорбанын көтәүелләргә генә ҡала. Килеп күренеүе менән өҫтөнә ырғыр өсөн хәл йыйырға, тын алырға ла форсат бар. Әммә көтөү ғазапҡа тиң. Секундтар - минуттай, минуттар сәғәттәй тойола бындай саҡта. Тимертырнаҡ күкрәгенән сығарған тынын мөмкин тиклем ҡар аҫтына ебәрергә тырышып, үҙенсә йәһәт кенә әүәләп алған ҡар өңөнә инеп боҫто. Ҡарһаланып ҡасып килгән илектең тынын ул хәҙер тойоп аласаҡ та. Әммә күптән инде танауына бәрелер тын һаман да тойолманы. Туҡта, әгәр ҙә теге Тертелдәк ул боҫҡан ергә килмәйенсә, икенсе яҡтан тау үренә китһә? Тимертырнаҡ асырғанып тағы ла һауаға һикерҙе. Тойомлауы дөрөҫкә сыҡты, теге хәстрүш, ысынлап та, саҡ ҡына ситкәрәк тартылып, үргә икенсе урындан ынтылмаҡсы. Тағы ла бер көсөргәнеш талап итеlә өйөр башлығынан. Ул үргә табан ҡапыл ырғыны ла, күкрәгенә һуғылған ҡар ҡорғанына эләгә-сәсәй, асырғана-асырғана Тертелдәктән саҡ ҡына алғараҡ сығып, уны тау түбәненә табан кире ҡайырырға яҫҡынды. Уның ниәтен белгән һымаҡ Тертелдәк тә ҡапыл туҡталып, ҡатып ҡалды. Ошо секундтар Тимертырнаҡ файҙаһына ине. Өйөр башлығы аҡтыҡ көсөн туплап тағы ла бер ынтылды ла, Тертелдәктең күҙенә салыныр урынға барып еткәс: "Күрмәһәң, күр, бына мин булам!" тигән һымағыраҡ шулай уҡ хәрәкәтһеҙ ҡалды. Әгәр ҙә ул ошоно эшләмәһә, Тертелдәк уның тапҡырын үтеп тә китер ине.

Маҡсатына өлгәште. Албырғатты. Ҡорбаны кинәт боролоп, килгән юлына табан ҡуҙғалды. Үҙенең әле генә үткән эҙҙәренә баҫып бер-ике һикергәс, артынан ҡыуа килеүсе башҡа ыржайҙарҙы күреп ҡалды ла, тағы ла ҡырын яҡҡа тартылды. Уның был йүнәлешенә алдан уҡ әҙер торған Тимертырнаҡ тағы ла бер көсөргәнеш яһап, Тертелдәкте тағы ла килгән яғына боролорға мәжбүр итте.

Тертелдәк өс яҡтан ҡамалды. Әлегә уның өсөн берҙән-бер асыҡ ҡалған дүртенсе тараф әле генә өйөр башлығы Тимертырнаҡ елдәй елеп үткән ағаслыҡҡа барып терәлә. Әгәр ҙә Тертелдәк унда тиклем барып етһә, ауыҙ-ҡулдан ысҡынасаҡ. Өйөр башлығы тау түбәнендә ҡар ҡорғандары менән айҡашҡан ыржайҙарға ҡараш ташланы. Көсөктәренең әсәһе Һортойҙо бер ҡарауҙан таныны. Олоған тауыш сығарып ырылдап ҡуйҙы. Тимертырнаҡтан өс йәшкә өлкән инә ыржай уның тик бүреләр генә алыҫ арауыҡтан аңлаша ала торған лөғәтендәге һүҙҙәрен шундуҡ төшөндө. Ул көсөгө Һәүеректе эйәртеп, шундуҡ ағаслыҡҡа йомолдо. Ҡалған ыржайҙар иһә, ҡамауҙа ҡалып урталыҡта ырғандаған Тертелдәкте ян-яҡтан урауға алды.

Ҡалған ваҡиғаларҙы Тимертырнаҡ баҫҡан урынынан ғына ҡымшанмай күҙәтте. Үҙе ҡорған тоҙаҡҡа ҡоралайҙың нисек барып ҡапҡанын рәхәтләнеп ҡарарға ярата ул. Режиссер һымаҡ. Уйлағаны дөрөҫ булды. Раҫҡа сыҡты. Әгәр ҙә Тертелдәк ыржайҙарҙың ҡорған мәкерен һиҙеп, ҡапыл кирегә боролоп, был яҡҡа табан яҫҡынырға уйлаһа, һаҡлыҡ өсөн дә өйөр башы ошо урында ҡалырға тейеш. Был, беренсенән, икенсенән, ыржайҙар ҡоралайҙы йығып боғаҙлаған хәлдә лә, ул килеп етеп, итенән ауыҙ итеп ҡарамайынса, ризыҡҡа берәү ҙә йоғонмаясаҡ. Был Тимернаҡтың үҙ өйөрөндә урынлаштырған тәртибе. Ҡануны. Уны боҙорға берәү ҙә баҙнат итмәйәсәк.

Әммә аҫта барған ваҡиғалар ҡапыл ғына икенсе һүрәтләнеш алды. Өйөр башлығының ҡорған сценарийы буйынса тамамланманы был һунар. Ҡайҙан килеп сыҡты һуң тағы ла бер ҡоралай?

* * *

Урһәләнеп сәбәләнгән Тертелдәк буталып бөттө. Ҡайһы яҡта ыржайҙар, ҡайһы яҡҡа ҡотолоу юлы киткәнен дә белмәй ул хәҙер. Тегеләй барһа ла - ыржайҙар, былай йүгерһә лә ыржайҙар. Шул рәүешле урталыҡта тыбызыҡлаған сағында күҙенә салынған ағаслыҡты ул ҡотолоу юлы итеп ҡабул итте. Тап шул ағаслыҡтың аръяғына ҡасҡан тоҡомдаштарын да иҫенә төшөрҙө. Шул яҡҡа табан ынтылды ла. Әммә инде ағаслыҡҡа барып еттем тигәнендә ҡаршыһына килеп сыҡҡан ике ыржай уны туҡталып ҡалырға мәжбүр итте. Ҡарт инә бүре Һортой менән Һәүерек ине улар. Тертелдәк килгән яғына кирегә боролорға итте лә, тамам тоҙаҡтың эсенә килеп инеүен аңлап, Һортой менән Һәүеректең янынан йүгереп үтмәксе булды. Һортой уға ынтыла биреберәк ҡуйҙы ла, туҡталды, улы Һәүереккә юл бирҙе. Һунар эстафетаһын тапшырҙы. Һунар ҡомарына тамам бирелгәйне, ҡорбанына ҡаныҡҡайны Һәүерек. Ул Тертелдәкте бер-ике һикереүҙә ҡыуып етте лә, уның боғаҙына ырғырға әҙерләнде. Әммә Тертелдәк ситкә ырғып өлгөрҙө. Һәүерек уның артынан уҡ ташланырға иткәйне, яңы ғына Тертелдәк баҫып торған урынға икенсе бер ҡоралай килеп төштө. Ҡайҙан уның алдына килеп сыҡты һуң икенсе ҡоралай? Әллә күҙенә күренәме? Улай тиһәң, ағаслыҡ араһынан ҡапыл атылып килеп сыҡҡан Һөтләкәйҙе ыржайҙарҙың барыһы ла күрҙе. Һортой улының һунарына ҡамасауларға яҫҡынғанын күреп, ситкәрәк ҡайырырға ла маташты. Һөтләкәй уның башы осонан һикереп үтеп, Һәүеректең алдына килеп төштө. Ҡан туйы башланды. Тертелдәк кенә яратҡан өләсәһен күреп өлгөрмәне. Үҙенең нисек итеп ыржайҙарҙың ауыҙынан ҡотола алыуының сәбәбен дә аңламаны. Өләсәһенең ғүмер эстафетаһын ошо рәүешле итеп ейәнсәренә тапшырғанын да белмәне.

***✓ Һөҙөмтәлә, беҙ килеүгә 15 көн ҡалды тигәндә, емерелгән манара Ирек Байышев аҡсаһына төҙөкләндерелә, бронза деталдәргә алтын ялатыла. Шулай итеп, башҡорт кешеһе немецтарҙы уңайһыҙ хәлдән ҡотҡара.***

Ул ағаслыҡ аша сығып, күптән инде үр башына сыҡҡан тоҡомдаштарына барып ҡушылды.

* * *

Ҡан туйы бик оҙаҡҡа һуҙылманы. Хатта Һөтләкәйҙең ҡайнар ҡанын да эсеп өлгөрмәне Тимертырнаҡ. Барыһына шаһит булған инә бүре Һортой ҡанһырап ятҡан Һөтләкәй янына яҡын да килмәне. Уның аяҡтарын ниҙер бығаулаңы. Шул саҡ ҡапыл мылтыҡ шартлауы һәм һунарсыларҙың һай-һайтлап саңғыла үрҙән төшөп килеүе ыржайҙарҙы ҡорбанын ҡалдырып китергә мәжбүр итте. Һөтләкәйҙең итен яҡындағы ауыл эттәре ашап кинәнде.

Төҙтәкәләрҙең ниәте бик етди ине. Улар ыржайҙарҙы ялан еренә сыҡҡансы саңғыла ҡыуып йөрөттө, тигеҙгә сыҡҡас, уларҙың артынан һыбайлылар төштө. Төҙтәкәләр уларҙы икешәрләп ҡыуҙы. Тәүҙә берәүҙәренең аттары арый, уларҙы икенселәр алмаштыра. Бүре ҡыуыу эстафетаһының һуңғы сиратына эләккән аталы-уллы Мырҙағәле менән Айтуған Аласовтар дүртенсе көн тигәндә тамам хәлдән тайған ыржайҙарҙы ҡурсаулыҡ сигендә ҡыуып етте. Йәше етмештән уҙған атай кеше улына үҙенең һунарсы оҫталығын өйрәтергә теләп, үҙе ҡыуып еткән бүрене Айтуғандың һуғып алыуын теләп, атының башын ситкә борҙо. Бүре һуғыу эстафетаһын ул улы Айтуғанға тапшырҙы. Ун етеһе тулған Айтуған, шулай итеп, үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр бүре һуғып алды. Тик теле ауыҙынан сығып, хәлһеҙләнгән бүрене инде ҡыуып еттем тигәнендә икенсе бер ҡарт бүренең ҡайҙандыр килеп сығып, йәшерәгенә ҡасырға мөмкинлек биреүенең сәбәбен генә аңлай алманы ул. Көсөгә Һәүерек урынына суҡмар аҫтына ятыусы инә бүреҺортой ине.

-Атай, ә ҡарт инә бүре нишләп үҙе теләп суҡмар аҫтына килеп инде ул? - тип һораны ул Һортойҙоң тиреһен һыҙырған саҡта.

-Белмәйем, ә ниңә мин үҙем һуға торған бүрене һинән һуҡтырҙым һуң, улай булғас? - тип атай кеше улының һорауына һорау менән яуап бирҙе.

Аталы-уллы Аласовтар дүрт көн буйына әллә нисә атты арытып, һунар ҡомарына бирелеп, бер генә нәмәне иҫенән сығарған икән. Улар, баҡтиһәң, бүрене ҡурсаулыҡ эсендә һуғып алған. Ҡурсаулыҡ һаҡсылары погонлы Төҙтәкәләр менән Мырҙағәленең йортона таңнамаҙҙан килеп акт төҙөнө. Аңлатманы Мырҙағәле яҙҙы, актҡа ла ул үҙе ҡул ҡуйҙы. Барыһын да үҙ өҫтөнә алды. "Һунарға яңғыҙым сыҡтым", тип яҙҙы ул тәртип һаҡсылары талап иткән аңлатмаға. "Айтуғанға әле йәшәргә лә йәшәргә, ниңә биографияһын боҙорға, уға әле алдағы йылда институтҡа инергә", тип уйланы атай кеше.

Был саҡта Айтуған һунар хәтирәләренә бирелеп, татлы төштәр күреп йоҡлай ине.

Тереклекте мәңгелек менән тоташтырыусы эстафета дауам итә...

**(Аҙағы. Башы 6-7-се һандарҙа).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# СИРКӘҮ КӨМБӘҘЕНДӘГЕ...

## башҡорт уғы



**Өфөнөң "Любизар" - беренсе башҡорт атлылар полкы" хәрби-тарихи реконструкция клубы ағзаларының былтыр көҙ Германияла булып, Шварца ҡаласығындағы "Изге Лауренция сиркәүе"нең көмбәҙенә алтын уҡ ҡуйыу тантанаһында, шулай уҡ Лейпциг ҡалаһы янында Халыҡтар һуғышының 200 йыллығына арнап үткәрелгән хәрби-тарихи реконструкция сараһында ҡатнашыуы тураһында яҙып сыҡҡайныҡ инде. Ватанды һаҡлаусылар көнө байрамы алдынан Клуб етәксеһе Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ менән ошо ваҡиғаны яңыртып, уның һөйләгәндәрен гәзит уҡыусыларыбыҙға ла ишеттерергә булдыҡ.**

- Шварца коммунаһы Тюрингия еренә ҡарай, - тип һөйләп китте Илдар Шәйәхмәт улы. - Элекке саксон ерҙәре иҫәпләнә. Бөгөн был ҡаласыҡта, 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса, бер мең ике йөҙ самаһы кеше йәшәй. Лейпциг ҡалаһында милли кейемдәребеҙҙе кейеп, микроавтобус яллап, 200 саҡрымға көньяҡтараҡ урынлашҡан Шварцаға килеп туҡтап, тамаҡ ялғарға ашхана-маҙар эҙләргә тотонғайныҡ, эргәләге шәхси йорттан 50 йәштәр самаһындағы ир менән ҡатын килеп сығып, беҙҙе үҙҙәренә сәйгә саҡырҙы. Германияла ни тиклем матур, төҙөк йәшәүҙәре, теүәллек яратыуҙары тураһында ишеткәнем бар ине, Шварцала саҡта уның дөрөҫлөк икәнен аңлап, үҙем өсөн тағы бер-нисә асыш яһаным. Бындағы халыҡ тарихҡа, тарихи ҡомартҡыларға шул тиклем һаҡсыл ҡарай, уларҙы хатта өйҙәрендә лә һаҡлай икән. Беҙҙе ҡунаҡ иткән ғаиләнең өйөндә, бер мөйөштәрәк, берәүгә лә ҡамасауламаҫлыҡ итеп ер эшкәртеү, иген игеү ҡоралдары урын алғайны. Беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙы күреп, йорт хужаһы: "Балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ ҡартаталарының ер эшкәртеүселәр, ябай хеҙмәт кешеләре булыуын белеп үҫһен өсөн бына шулай күҙ алдында тора был ҡомартҡылар", - тине.

Беҙҙе саҡырып, һыуһыныбыҙҙы ҡандырып, ял минуттары бүләк иткән ғаиләгә мең рәхмәттәр уҡып, уларға үҙебеҙ менән алып килгән иҫтәлекле бүләктәребеҙҙе биреп, бергәләп фотоға төшкәндән һуң, "Изге Лауренция" ғибәҙәтханаһына, урындағы халыҡ телендә - "кирха"һына юлландыҡ. Алтын көмбәҙе менән алыҫтан ялтырап күренгән боронғо ғибәҙәтхана янында йәнлелек тантана итә: кран автомашинаһы янында халыҡ мәж килә. Беҙҙең иғтибарҙы шунда уҡ алтын шарға ҡаҙалған алтын уҡ йәлеп итте. Бына ул бөгөнгө тантананың сәбәпсеһе, һәр башҡорт өсөн ғорурлыҡ булыр тарих объекты! Әйткәндәй, Халыҡтар һуғышының 200 йыллығын билдәләргә әҙерләнгән мәлдә Шварца халҡы уҡтың бронза күсермәһенә алтын ялатырға ниәтләп, эшкә тотонғас, был эште атҡарырға аҡсалары етмәйерәк ҡала (немецтарҙың да аҡсаһы һанаулы ғына икән!). Өҫтәүенә, манараның өҫ яғы сереп, емерелеп төшә. Хәйер, манараның емерелеүе файҙаға ла була: бынан йөҙәр йыл элек манараның осона беркетелгән тимер шар эсенән тимер цилиндр табылыуы урындағы халыҡ өсөн көтөлмәгән яңылыҡ була. Был цилиндр эсендә нимә бар - хатмы, әллә иҫтәлекле әйберме, әлегә берәү ҙә белмәй. Белгестәр әле уны асырға ашыҡмай. Манараның байрам етеп килгән ваҡытта емерелеп төшөүе Шварца бургомистрының төн йоҡоларын ала. Аптырағас, ул Лейпциг ҡалаһында йәшәүсе милләттәшебеҙ Ирек Байышевҡа мөрәжәғәт итә. Ирек, әлбиттә, уйлап та тормайынса, бөтөн аҡсаһын ошо изге эшкә - манараны төҙөкләндереүгә йүнәлтә. Һөҙөмтәлә, беҙ килеүгә 15 көн ҡалды тигәндә, емерелгән манара Ирек Байышев аҡсаһына төҙөкләндерелә, бронза деталдәргә алтын ялатыла. Шулай итеп, башҡорт кешеһе немецтарҙы уңайһыҙ хәлдән ҡотҡара.

Беҙҙе башҡорт кейемендәге Ирек Байышев һәм шулай уҡ Германияла йәшәүсе тағы бер милләтәшебеҙ Нәсүр Йөрөшбаев ҡаршы алды, тәржемә йәһәтенән ярҙам итте. Беҙ бургомистрҙан уҡтың тарихы тураһында ни белеүе менән ҡыҙыҡһындыҡ. Шварца халҡында йөрөгән легендалар буйынса, королдең ейәне - Шварца бургомистры Карл Гюнтер, Париждан еңеү менән ҡайтып барғанда Шварцанан 20 саҡрым алыҫлыҡта ялға туҡталған башҡорттарҙы ҡаласыҡҡа саҡырып, халыҡ менән аралашыуҙарын, үҙ оҫталыҡтарын күрһәтеүҙәрен һорай. Башҡорттар, риза булып, ҡорал-яраҡтары, аттары менән ҡалаға инә. "Төньяҡ амурҙары"ның ғәжәйеп ғәскәр булыуына барыһы ла шундуҡ иғтибар итә. Ҡала халҡынан кемдер: "Ә был ҡоралдар менән нисек итеп туптарға ҡаршы бара алдылар икән? Ҡоралдары уйынсыҡ ҡына бит", - тип әйтеп һала. Бәхәс ҡуба. Бәхәскә сик ҡуйыр өсөн башҡорттарҙан бер батыр, билдәһеҙ йөҙ башы, дүрт егетен сиркәүҙең дүрт тарафына баҫтырып, 100-120 метр алыҫлыҡтан көмбәҙгә уҡ атырға бойора. Дүртеһе лә уҡтан атып өлгөргәнме, юҡмы, уныһы билдәһеҙ, әммә бер уҡ, ғибәҙәтхана көмбәҙенең шарын тишеп үтеп, шунда тороп ҡала. Беҙгә: "Был хәл ғибәҙәтхананың "амбар китабы"нда теркәлгән," - тине Шварца бургомистры. "Амбар китабы"н үҙ күҙебеҙ менән күреү мөмкинлеге булманы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

Тантана мәлендә "Алтын уҡ" ҡаҙалған шарҙың эсенә тағы бер яңы капсула һалдылар. Беҙ иһә капсула эсенә "Башҡорт халҡының хәрби даны" тигән үҙебеҙ эшләгән миҙалды, клуб тураһындағы буклетты һалдыҡ. Күп тә үтмәне, капсуланы шарҙың эсенә беркетеп, уны ҡурғаш иретеп, тыштан йәбештереп тә ҡуйҙылар. "Киләсәк быуындарға адресланған был капсула йөҙ йылдан һуң ғына асыласаҡ", - тинеләр. Алтын уҡ ғибәҙәтхана көмбәҙенә беркетелгәс, Шварца халҡы менән хушлашып, Лейпцигҡа - хәрби-тарихи реконструкцияға, йәғни тарихи ваҡиғаны һынландырыу сараһына юлландыҡ. Сәйәхәтебеҙҙең тәүге маҡсаты - Шварца ғибәҙәтханаһындағы башҡорт яугирының уғын яңыртыу сараһында ҡатнашыу булһа, бынан ике йөҙ йыл элек башҡорттарҙың биш атлы полкы ҡатнашҡан Лейпциг янындағы Халыҡтар һуғышында халҡыбыҙ исеменән сығыш яһау - икенсе маҡсатыбыҙ ине. Башҡортостандан Юлай Ғәлиуллин, Мәжит Ибраһимов, Айҙар Мәжитов, Рафаэль Амантаев, Польшала йәшәүсе Азат Ҡужин, Дондағы Ростов ҡалаһынан аталы-уллы Сәлимовтар (Мәхмүт һәм уның улы Дамир, үҙ теләктәре менән килеп ҡушылды) һәм мин - бөтәһе 8 башҡорт ир-уҙаманынан торған командабыҙға Германияла йәшәүсе Ирек Байышев менән Нәсүр Йөрөшбаев та ҡушылды. Йәмғеһе 10 башҡорт, 5 йәйәүле, 5 атлы сифатында уйындарҙың иң әүҙем ҡатнашыусылары булдыҡ.



Шулай итеп, ике сәғәт дауам иткән сағыу тамашала алты меңдән ашыу тамашасы алдында бынан 200 йыл элекке ата-бабаларыбыҙ ролендә булдыҡ: уҡ сойорғоттоҡ, ҡылыс болғаныҡ, башҡа хәрәкәттәр күрһәттек. Ике сәғәт буйы эйәр өҫтөндә "алыштыҡ", беребеҙ ҙә йығылып төшмәнек, "яуҙа" яңылыштан алынған йәрәхәттәребеҙ ҙә булманы. Минең уң ҡулымда - командир һөңгөһө, унда аҡ байраҡ эленгән. Егеттәр шул байраҡҡа ҡарап, ниндәй бойороҡ биреүемә ҡарап, минең менән бергә хәрәкәт итәләр. Мин һөңгөмдө һәр ваҡыт яҡшы йөрөтөргә тейешмен. Уң ҡулда - ҡорал. Ҡулда - ҡамсы, ҡылыс, яурынға йә беләккә һөңгө эленгән. Германияла арендаға алған атым бик тыңлаусан туры бейә булып сыҡты. Исеме "Иче" ине. Мин уны "Илсе" тип йөрөттөм. Ул мине яҡшы хужа итеп ҡабул итте, буғай. Ғөмүмән, туптар шартлаған, дары еҫтәре сыҡҡан, халыҡ ҡырмыҫҡа иләүе кеүек гөж килгән майҙанда ҡан кимәленән килгән аңлатып булмаҫлыҡ тойғолар менән йәшәлде...

**Илгизәр БУЛАТОВ
яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠУРҠЫУҘАН...
## дарыу бар, тиҙәр

■ Фин ғалимдары бер үк хис-тойғоноң күп һәм төрлө кешенең тәнендә бер үк төрлө физик тойомлауҙар тыуҙырыуын асыҡлаған һәм шуның һөҙөмтәләре буйынса тойғолар картаһын төҙөгән. Бынан элегерәк көнсығыш һәм көнбайыш мәҙәниәтендә гел генә телгә алынып килгән был фаразды Аалто университеты ғалимдары иҫбатланы. Улар кеше хистәренең аҡыл өлкәһендә генә йәшәмәүен, ә уның биологик нигеҙе лә булыуын асыҡланы. Кеше тәнендә эмоциялар картаһын төҙөү өсөн барған тикшеренеүҙәрҙә Финляндия, Швеция һәм Тайвандән 700-ләп кеше ҡатнашты. Тәжрибә үтеүселәрҙә төрлө хис-тойғолар уятып, ғалимдар уларҙың ниндәй тән өлөштәрендә ниндәйерәк үҙгәрештәр (киңәйеү, йомшарыу, бәләкәйләнеү) кисереүҙәрен теркәп барырға ҡуша. Тәндең теге йәки был өлөшөндә аңлы эшләнелгән үҙгәрештәр киләсәктә кешегә шуға ярашлы хис-тойғо тыуҙырырға булышлыҡ итәсәк, мәҫәлән, бәхет тойғоһо, тип аңлатма бирә быға ғалимдар.

■ Белоруссияның Милли академияһы белгестәре "ҡурҡыуҙан дарыу" уйлап сығарыу буйынса эш алып бара. Улар танау ҡыуышлығындағы лайлалы тиресәгә тәьҫир итеп, кешенең холоҡ-ғәмәлдәрен үҙгәртеп булыуын фаразларға тырыша.Тәжрибәләр барышында ғалимдар танау ҡыуышлығының лайлалы тиресәһенә кешенең аш һеңдереү трактында йәшәүсе эсәк таяҡсалары фрагменттарын ебәреп, иммун системаһын әүҙемләштереү мөмкинлеген ҡарай.

■ Уппсала (Швейцария) университеты ғалимдары осраҡлы рәүештә ошоға тиклем булыуы мөмкин түгел тип иҫәпләнгән материалды килтереп сығарыуға өлгәшкән. Уға Упсалит тигән атама бирелгән. Инновация магний карбонаты модификацияһынан ғибәрәт һәм ул масса берәмегенә яҫылыҡ майҙаны буйынса донъя рекордсмены булып тора. Упсалит шулай уҡ адсорбция, йәғни һыу йәки химик берләшмәләрҙе үҙенә һеңдереү буйынса ла абсолют рекордсмен.

■ Биология буйынса алдынғы баҫмаларҙан иҫәпләнеүсе "PLoS ONE"журналында яҙылыуынса, Ноттингем университеты ғалимдары тарафынан генетик мутация шифрының сиселеүе һөҙөмтәһендә ҡайһы бер тоҡомло тауыҡтар зәңгәр төҫтәге йомортҡалар һала башлаясаҡ икән. Өйрәнелгән аҡ һәм һоро йомортҡаларға ҡарағанда зәңгәрҙәре айырыуса нәзәкәтле тәме менән гурмандар өсөн бына тигән үтемле ризыҡ буласаҡ, тип көтөлә.

■ Көндөҙ ҡояштан энергия алып, кис өйҙө яҡтыртыусы аҙ ҡеүәтле диодлы лампа - был ҡайһы берәүҙәр өсөн хыял ғына. Бындай лампа NOKERO,S N100 маркаһын йөрөтә. Ул электр энергияһы ҡуллана алмаусы Һиндостан, Африка һәм "өсөнсө донъя"ның башҡа илдәрендә йәшәүсе ярлы халыҡ өсөн махсус эшләп сығарылған. Аккумуляторы тулыһынса зарядланған булһа, был лампочка дүрт сәғәт буйы яна. Уның конструкцияһында ҡояш батареялары, биш яҡтылыҡ диоды бар, хаҡы - 15 АҠШ доллары . Ярлы халыҡ барыбер уны һатып ала алмаясаҡ, шуға лампалар үтә ярлыларға бушлай таратыла.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# СПОРТ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНӘЙЕК,
## йәки Тренер һабаҡтары...

**Бөгөнгө ҡоробоҙҙа спортҡа үҙ көсөн, ваҡытын, булмышын бағышлаған тренер Батыр ЙӘНДӘҮЛӘТОВ менән фекер алышырбыҙ. Сибай ҡалаһының "Тиҫтер" спорт клубы директоры, "Ҡара аждаһа" көнсығыш һуғыш төрҙәре клубының легендар етәксеһе, ушу буйынса донъя чемпионы менән "Йәштәргә бөгөн ниндәй спорт төрө менән шөғөлләнергә?", "Алдыңа ҡуйған маҡсатыңа нисек өлгәшергә?" һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләнек. Уның һүҙе тренерҙарға ғына түгел, ата-әсәләргә лә, йәштәргә лә, балаларға ла файҙалы булыр, тибеҙ.**



### Чемпиондар әҙерләү "цехы"

Сибайҙа көнсығыш һуғыш төрҙәре өсөн бик яҡшы йыһазландырылған зал бар. Унда республика, хатта төбәк-ара ярыштар ҙа йыш уҙа. Заманса йыһазландырылған ошо бинала беҙҙең "Ҡара аждаһа" клубы шөғөлләнә лә инде.

"Уҡыусыларыңдың кеме генә сит илгә сыҡһа ла, беренсе урын яулай ҙа ҡайта. Бының сере нимәлә?" тип һорағандары бар. Бының сере - әҙерлектә. Бер көн эсендә бер спортсы, ғәҙәттә, икешәр, өсәр күнекмә көсөргәнеше ала. Уңыш ҡаҙанам, чемпион тәрбиәләйем тиһәң, бик күп тир түгергә тура килә. Бөгөн спорт менән шөғөлләнергә теләүселәр һаны ифрат күп, бының өсөн мөмкинлектәр, шарттар ҙа бар. Сибайҙағы клубтарға, түңәрәктәргә лә йәштәр дәррәү килә. Улар күберәк тай боксы менән шөғөлләнеүгә өҫтөнлөк бирһә, үҫмерҙәр ушуға, гимнастикаға яҙыла. Өлкән синыф уҡыусылары һәм студенттар, ниңәлер, тай боксына өҫтөнлөк бирә. Ә башланғыс синыф уҡыусыларына йүгереп-һикереп, акробатика менән шөғөлләнеү нығыраҡ оҡшай. Йәш баланың формалаша башлаған тәнен һығылмалы ла, етеҙ ҙә итә торған гимнастик төр - ушу-таолу иҫәпләнә, ул баланы үҙ хәрәкәттәрен контролдә тоторға өйрәтә. Пластика һәм һығылмалыҡ - йәш организм өсөн кәрәкле компоненттар. Мин үҙем дә йәш балаларҙың аяуһыҙ спорт төрҙәренә йөрөүенә ҡырҡа ҡаршымын. Юғиһә, баланың төрлө кимәлдәге йәрәхәттәр алыуы ихтимал.

Тай боксына, ғәҙәттә, яҡшы әҙерлек үткәндән һуң ғына киләләр. Үҫмерҙәр, ғәҙәттә, тай боксы менән дә, ушу менән дә берҙәй шөғөлләнә: ниндәй төр буйынса ярыштар етә, шул төр буйынса сығыш яһай. Йәғни, беҙҙең клубтарҙа шундай тенденция күҙәтелә: башланғыс кластарҙа ушу менән, урта синыфтарҙа шул уҡ ушу менән дә, муай-тай менән дә, ә юғары синыфтарҙа күберәк муай тай менән генә шөғөлләнәләр.

Республика кимәлендә сығыш яһау өсөн мөмкинлектәребеҙ бар, сығыш яһап та торабыҙ. Тик спортсы өсөн сит илдәрҙә сығыш яһау - үҫеш критерийҙарының иң мөһимдәренең береһе булып тора. Үҙебеҙҙә ниндәй генә яҡшы йыһазландырылған залдар булмаһын, спортсыға ярыштарға йөрөү мөмкинлеге булдырылмай икән, был барыбер уның үҫешен тотҡарлай, үҙ-үҙен камиллаштырыуға ҡамасаулай, хатта спорттан йөҙ бороуға ла килтерә.

2001 йылда Лос-Анджелес ҡалаһында үткән ушу буйынса донъя чемпионатына уҡыусым менән барып, үҙем дә ҡатнашып, икебеҙ ҙә тәүге урындар алыуҙан башланды донъя кимәлендәге ярыштар серияһы. Ике йылдан Сергей Макаров Европа чемпионы булды. 2007 йылда тағы бер тәрбиәләнеүсем - Тимур Кәримов Тайвань утрауында үткән ярышта беренселек яуланы. Күп тә үтмәй, Корейла үткән донъя чемпионатында Иҙел Ураҙгилдин исемле егет тә донъя чемпионы булды. Был еңеүҙәргә тағы бер еңеү өҫтәлде - 2011 йылдың ноябрендә донъя аренаһында 15 йәшлек Артур Ишмырҙин исеме балҡыны. Ул Лос-Анджелеста үткән ушу буйынса донъя кубогында бер түгел, алты төрҙән үҙенең беренсе булыуын танытты.

### Ҡабат-ҡабат ынтылып...

Бөгөн кешеләрҙә бер-береңә ярҙам итеү тигән сифат юғалыбыраҡ тора. Ғаиләләрҙә тәрбиәләнмәйме был, белмәйем. Шуға күрә мин үҙемдең уҡыусыларыма һәр ваҡыт: "Һеҙ ниндәй генә үргә күтәрелһәгеҙ ҙә иптәштәрегеҙгә ҡулығыҙҙан килгәнсе ярҙам итегеҙ", - тип өйрәтәм. Юғиһә, йәштәргә лә, балаларға ла бер-береһенән көнләшеү тигән сир йоғорға ғына тора.

Төрлө ярыштарҙа төрлө кешеләр, төрлө халыҡ вәкилдәре менән аралашҡаным бар. Берҙәм булыуҙары, бер төптән эш итеүҙәре менән Дағстандың спортсы егеттәре айырылып тора, уларҙың бер-береһен күтәреүе, еңелгән милләттәштәрен әүрәтә, еңгәндәрен маҡтай белеүҙәре һоҡландыра. Бәлки, беҙҙең күҙ алдында ғына шундай берҙәмлек күрһәтәләрҙер?

Башҡорт тәбиғәте менән ихлас халыҡ бит инде ул. Ул үҙенең һөйөүен

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТӘКӘББЕРЛӘНМӘЙЕК!

**Иң яман йөрәк сирҙәренең береһе - тәкәбберлек ул. Ошондай "сирҙән" дә ҡурҡынысырағы юҡтыр был донъяла. "Йөрәгендә бер генә тамсы тәкәбберлек булған кеше йәннәткә инмәҫ", тип әйтә Бәйғәмбәребеҙ.**



Кеше хаталанып та, тәүбәгә килеүе мөмкин. "Яҡшы ғәмәлдәр насар эштәрҙе юҡ итә", тип гонаһ эшләп тә, үҙҙәренең яңылыш эшләүҙәрен аңлаусыларға өмөт бирә Аллаһы Тәғәлә. Ләкин гонаһ эшләп тә, тәкәббер булыусыларға Аллаһы Тәғәлә ҡаты яза вәғәҙә итә. "Аяттарыбыҙҙы ялғанға сығарып, үҙҙәрен бөйөк күрһәтергә теләгәндәр (тәкәбберләнгәндәр) бар, бына шуларға инде Күк ишектәре асылмаҫ һәм улар, дөйә энә күҙе аша уҙғанға саҡлы, йәннәткә кермәҫ", тип әйтелә изге Ҡөрьәндә. Икенсе бер аятта: "Ер йөҙөндә хаҡһыҙ рәүештә тәкәбберләнгәндәрҙе аяттарымдан йыраҡлаштырасаҡмын. Бөтөн аяттарыбыҙҙы күрһәләр ҙә, улар иман килтермәҫ. Тура юлды күрһәләр ҙә, ул юлға төшмәҫтәр. Аҙғынлыҡ юлын күрһәләр, шул юлдан китерҙәр. Аяттарыбыҙҙы ялғанға сығарырға теләгәндәре һәм уларға иғтибарһыҙ ҡалғандарына күрә, улар (Аллаһ тарафынан) шул хәлгә төшөрөлдө", - тиелә.

Тәкәбберлек, һауаланыу, эреләнеү кешенең эсендә йәшенгән тойғо, әммә ҡайһы бер саҡ уның холҡонда, ҡиәфәтендә сағылмай ҡалмай. Кемдер үҙен генә күреп, үҙе менән генә һоҡланып, шул уҡ ваҡытта башҡаларҙы үҙенән кәм күрә икән, ул, тимәк, тәкәбберлек "сирен"



## 24 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 "Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Черные кошки". Сериал (16+).
23.15 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Карточный домик". Сериал
02.10, 03.05 "Осада". Боевик (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Аркадий Кошко. Гений русского сыска" (12+)..
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Гроб на две персоны". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-12". "Лишний". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодрама. 4 серии (12+).
00.40 "Девчата" (16+).
01.25 "Вызываем огонь на себя". Сериал.
03.25 "Закон и порядок-19". Сериал
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Илдар Ғүмәров
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Шәжәрә" (Борис Атанов) (6+)
15.00 "Мөхәббәтле донъя". Фәдис Ғәниев, Лилиә Биктимерова (6+)
21.00 "Кис ултырып". Рәдик Ефремов (12+)

### БСТ

07.00 "Сәләм!" (12+).
10.00 Новости недели (на башк. яз.) (16+).
10.30, 15.30 "Гора новостей".
10.45 "Городок АЮЯ".
11.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).
11.15 Новости недели (16+).
11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).
12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на баш. яз.).
12.45 "Весело живем" (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).
14.40 "Певец Агидели. Рашит Нигмати"
15.15 "В режиме рекордов" (6+).
15.45 "Физ-ра".
16.15 "Учим башкирский язык".
16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).
16.45 "КЛИО" (6+).
17.30 Новости культуры.
17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).
18.00, 23.30 "Автограф".
18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр. Главный день" (12+).
21.00 "Дознание" (16+).
22.00 "Следопыт" (6+).
23.00 "Дневник конкурса "Һылыуҡай-2014" (6+).
